***Дошмандарыңдан ҡурҡма - иң насар осраҡта улар һине үлтерергә мөмкин. Дуҫтарыңдан да ҡурҡма - иң насар осраҡта улар һиңә хыянат итергә мөмкин. Битарафтарҙан ҡурҡ - улар үлтермәй ҙә, хыянат та итмәй, әммә донъялағы бар хыянаттар һәм үлтерештәр уларҙың өнһөҙ ризалығы менән ҡылына.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5 - 11 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№18 (488)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бергәләшһәң...** эш берегә



4

**Ҡәһәр төшкән һуғыш касафаттары**



6-7

**Ҡурай һәм Ҡөрьән - иман сығанағы,** икеһе бергә бөйөк көскә әүерелә



8-9

**Бәндәм атлап килһә...** мин уға йүгереп барырмын



12

14 **ТВ-программа**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Бөйөк Ватан һуғышы афәте ҡағылмаған бер генә лә ғаилә юҡтыр илебеҙҙә. Һеҙҙең яҙмышта, ғаиләгеҙҙә был афәттең сағылышын нисегерәк һүрәтләр инегеҙ?

***Талха ҒИНИӘТУЛЛИН, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы:*** 30 миллионлап ҡорбан килтергән был һуғыш һәр ғаиләнең, һәр кемдең яҙмышында ҡәһәрле ролен уйнаны. Аяҡ-ҡулын өҙҙөрөп, тәнендә ҡурғаш ярсығы алып ҡайтҡандар ҙа йәндәре иҫән ҡалыуға шат һәм бәхетле инеләр. Ләкин асылда бәхет инеме һуң был? Һалдаттың психикаһын ҡаҡшатып, йәндәрен ғәрипләне һуғыш. Һуғыш бит ҡара-ҡаршы атышыу ғына түгел, кешене әхләҡи тарҡалдырыу ҡоралы ла ул, сөнки унда һин үҙең кеүек үк кешене - ҡаршы яҡ һалдатын үлтерергә мәжбүрһең. Үлтерергә, аяуһыҙ ҡырырға тип хәрби ант биргәнһең. Үлтермәһәң, тимәк, хыянатсы һәм ҡурҡаҡ йән булаһың. Үлтермәһәң, үҙеңде үлтерәләр - бына бит ул һуғыш фәлсәфәһе ниндәй. Һуғыш уты эсенә барып ингәндә мин урысса бер ауыҙ һүҙ белмәгән 18 йәшлек кенә етем ауыл балаһы инем. Йәндәрен ҡулдарына алып, илаулап оҙатып ҡалыусыларым булманы. Аҙаҡ, яу эсендә, бер иптәшемдең: "Етем булғас, һиңә ниндәй һәйбәт", - тигән һүҙҙәрендә, бер яҡтан, дөрөҫлөк тә бар ине шул... Унның ҡарауы, бер туған булмаһалар ҙа, яҡын ғына ҡәрҙәш Рәхим, Илһам, Низам, Хәйбулла ағайымдарҙы мәңгегә юғалттым. Бәләкәйҙән айырылмаҫ дуҫтар булып, бергә уйнап, балыҡ ҡармаҡлап үҫкән иптәш егеттәрем ут ғәрәсәтенән иҫән сыҡһалар ҙа, береһе ауылға ҡайтҡас, аҡылдан яҙҙы, икенсеһе асып башлаған шешәһен дә эсеп бөтөрә алмайынса, йән биргән... Һуғыш бынамын тигән ир уҙамандарының йәндәрен йәрәхәтләп ҡайтарҙы. Әйткәндәй, был хаҡта мин үҙемдең "Бына һуғыш бөтһә...", "Һөжүм", "Ҡурҡыу", "Беҙ кәмей барабыҙ" тигән әҫәрҙәремдә лә яҙҙым. Унда алғы һыҙыҡта дошман менән йөҙгә-йөҙ килеп алышҡан һалдаттарҙың еңеү яулап, тыныс тормошҡа ҡайтҡас, ҡайһыларының һуғыштағынан да ауырыраҡ хәлдәргә тарыуы хаҡында һүҙ бара. Былар һис тә уйҙырма түгел, ә үҙем шаһит булған, күргән-белгәндәр, баштан кисергәндәр. Тағы ла бер парадокс: һуғышта булмаһам йәки һуғыш булмаһа, Талха Ғиниәтуллин тигән яҙыусы ла булмаҫ ине,моғайын. Юҡ, мин юғалып ҡалмаҫ инем, әлбиттә. Инженермы, башҡа берәй күренекле һөнәр эйәһеме булыуға өлгәшер инем барыбер, сөнки холоҡфиғелемдә тырышлыҡ, ныҡышлыҡ һәм ҡыҙыҡһыныусанлыҡ көслө ине. Ә бына яҙыусы булыуымды, Аллаһы Тәғәлә мине шул ғәрәсәттән иҫән ҡалдырып, ана шул турала яҙырға ҡушҡандыр, тип ҡабул итәм. Киләһе быуындар был һуғыш тураһында хис-тойғоһоҙ тарих томдарынан ғына түгел, тарихыбыҙҙы боҙоп күрһәтергә маташыусыларҙың бысраҡ уйҙырмаларынан да түгел, ә ябай кеше, ябай һалдат яҙмышы йылъяҙмаһы булған әҙәби әҫәрҙәрҙән дә уҡып белһен ине, тигән теләктә ҡалам.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

# БАШҠОРТТАР ӘСИРЛЕККӘ ТӨШМӘНЕ,

## үлемде артыҡ күрҙе

**Тормош тигәнең һәр кемде үҙ сыбыртҡыһы менән ҡыуалай. Һәр кемгә үҙ һабаҡтарын бирә. Дөйөм кешелек тарихын уйҙан үткәрһәк, һәр заманға тормоштоң үҙ һынауы, үҙ рәхәте тейә. Бына шундай үҙ заманының һынауҙарын мул итеп иңендә татыған уҙамандарҙың береһе менән осраштыҡ был көндәрҙә. Ул -16-сы гвардия атлы дивизияһы (элекке 112-се Башҡорт атлы дивизияһы) ветераны, бөгөнгө көндә Әбйәлил районы Асҡар ауылында йәшәүсе 90 йәшлек Ғәйфулла ҒӘБИТОВ. Ветерандың Өфөгә килеүе тураһында ишеткәс тә уның менән осрашып, үҙебеҙҙе борсоған һорауҙарыбыҙҙы биреп ҡалырға ашыҡтыҡ. Әйҙәгеҙ, уның үҙен тыңлайыҡ.**

**(Дауамы 5-се биттә).**



Ғәйфулла ағай Ғәбитов "Тамыр" студияһы "һалдаттары" менән.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Бөйөк Ватан һуғышы афәте ҡағылмаған бер генә лә ғаилә юҡтыр илебеҙҙә. Һеҙҙең яҙмышта, ғаиләгеҙҙә был афәттең сағылышын нисегерәк һүрәтләр инегеҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Азамат ТАЖЕТДИНОВ, Рәсәй Федерацияһының мәғариф отличнигы:*** Атайым һуғыш башланған йылдың көҙөндә үк бер туған ҡустыһы Ғибат менән бергә фронтҡа китә, мин ул саҡта 3 кенә йәштә булғанмын. Әсәйем ҡулындағы биш бала менән уны оҙатып ҡала, алтынсыһына ауырлы була."Беҙ ауыр, хәүефле юлға сығабыҙ, Әминә. Улым тыуһа, уға Сәфәрғәле тип исем ҡушырһың,"- тип әйтеп китә атайым. 1942 йыл Сәфәрғәле донъяға килә. Әсәйемдең фиҙакәрлегенә әле булһа ғәжәпләнәм дә, һоҡланам да: бөтә нәмә фронт өсөн, фашисты еңеү өсөн, тип, көнө-төнө колхоз эшенән дә ҡайтып инмә, шул уҡ ваҡытта береһенән-береһе бәләкәй балаларынды ла ҡара (иң өлкән апайыбыҙға 12 генә йәш була). Дошман менән фронтта яғалашҡан атай-ағайҙарыбыҙ героизмына тылдағы әсәйҙәребеҙ ҡаһарманлығы килеп ҡушылмаһа, еңеп булыр инеме икән фашисты? Күпме хәсрәт, юғалтыу ҡайғылары кисереп, ваҡытынан алда сәстәре салланды, янып-көйҙө улар! Ил өҫтөнә килгән фажиғәне ғаиләгә килергән хәсрәттәр ҙә көтөргеһеҙ итте. 1942 йылдың сатлама һыуығында тыштан туңып килеп ингән миңә етәгеһе туғаным Әгләм һуҡыр шәм янына йыйылнам тип килеп, аңғармаҫтан уны ауҙара, майы өҫтөнә түгелә һәм бала тере факелға әйләнә. Һыу һибеп һүндерә алмағас, апайым уның өҫтөнә юрған киптереп ҡаплай. Янған тәненең әрнеүенә түҙә алмай, ике тәүлек ҡысҡырып ятҡандан һуң бала йән бирә. Ул ваҡытта 4-5 йәшлек кенә булғанлыҡтан, минең өсөн айырылғыһыҙ йән күргән туғанымдың үлеме һуғыш афәтенең иң хәсрәтле сағылыштарының береһе булып күңелемдә тороп ҡалған...

Киләһе йылына беҙҙе тағы ҡара ҡайғы баҫты: Смоленск йүнәлешендәге ҡаты һуғыштарҙың береһендә атайыбыҙҙың һәләк булыуы тураһында хәбәр алдыҡ. Уның менән бергә киткән Ғибат ағайыбыҙ ҙа әйләнеп ҡайтманы. Беҙҙең Баймаҡ районы Байым ауылынан һуғышҡа киткән 74 ир-егеттең ни бары 18-е генә ҡайтып килде. Ошо ветерандар иҫән саҡтарында, исмаһам, мәктәпкә осрашыуҙарға килеп, йәш быуынға һуғыш хикәйәттәрен һөйләй, уларҙы үҙҙәре яулап алып биргән матур, етеш тормошта тырышып уҡырға һәм эшләргә, илһөйәрҙәр булып үҫергә саҡыра ине. Үкенескә күрә, хәҙер уларҙың береһе лә ҡалманы. Шуға күрә хаҡлы ялға сыҡҡас, данлы яу юлы үткән ауылдаштарыбыҙ, тыуған яҡтарыбыҙ хаҡында электән йыйылып килгән бик күп материалдарҙы туплап, китаптар яҙып сығара башланым. Йәш быуын тыуған ягыбыҙ тарихын, уның данлы кешеләрен белһен, тигән маҡсаттан сығып.

***Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА, шағир, журналист:*** Бөйөк Ватан һуғышының бөтә ил өҫтөнә генә түгел, уның һәр ғаиләһенә ҡағылған афәт шоиҡанының ни тиклем ауыҙһыҙ булыуына **"Һуғыш балалары - тарих яралары"** тигән йыйынтыҡҡа материалдар туплағанда тағы ла ныҡыраҡ инандым. Бынан ике йыл элек, Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығын ҡаршылағанда, 65 тыл ветеранынан һөйләткән хәтирәләрҙән тәҙелгәйне ул йыйынтыҡ.

Ҡулдарына ҡорал тота алырҙай ир-егеттәр фронтҡа китеп бөткәс, тылдағы бөтә эш ҡатын-ҡыҙ һәм бала-сағә елкәһендә тороп ҡала. Дүрт йыл буйы барған һуғыштың алғы һыҙығы ҡаҡшамаһын өсөн апай-инәйҙәребеҙ көндә төнгә ялғап эшләй, үҙҙәре, балалары аслыҡтан шешенеп үлгән хәлдә лә бөтә аҙыҡ-түлекте фронтҡа оҙатып тора. Әйткәндәй, Икенсе Бөтә донъя һуғышында Ер йөҙөндә 13 миллиондан ашыу бала һәләк булған, тиҙәр. Ана шулай йәшәй ҙә башламаҫтан уларҙың ғүмере һуғыш тарафынан өҙөлгән, уларҙан тыуасаҡ сабыйҙар ғүмеренә балта сабылған, тамырҙары ҡоротолған. Мин осрашып һөйләшкән тыл ветерандары араһында ирҙәре һәм улдары менән бергә 5-6-шар кеше һуғышҡа киткән ғаиләләр байтаҡ ине.

Көйөргәҙе районының Ялсыҡай ауылында 1925 йылда тыуған минең буласаҡ атайым Сәлимйән Ҡотлогилдин 1942 йылда һуғышҡа китә. Ауыр яралар һәм контузия менән ҡайтып, оҙаҡ ваҡыт Өфө госпиталендә ята. Ауылға инвалид булып ҡайтһа ла шунда уҡ эшкә тотона - тракторға ултыра. Әсәйем Миңһылыу ҙа тракторсы була. 1947 йылда улар өйләнешә.1948 йылда - Миңлегөл апайым, 1951 йылда мин донъяға килгәнбеҙ, ләкин беҙгә атайлы булып, уға арҡа терәп үҫергә насип булманы: һуғыш яралары ҡиҫкенләшеп, атайыбыҙ 1953 йылда, минә ни бары йәш ярым саҡта вафат була. 28 йәшендә генә гөл гүр эйәһе, аңлы тормошомда үҙем бер тапҡыр ҙа "атай" тип өндәшә алмаған атайыма, 25 йәшендә тол ҡалып, аяҡһыҙ булһа ла сирле килеш беҙҙе яңғыҙы аяҡҡа баҫтырған әсәйемә һәм тағы ла ирҙәре, атайҙары һуғыштан ҡайтмаған тол ҡатындарға, етем балаларға, ҡаһарман тыл геройҙарына, уларҙың ҡаҡшамаҫ рухтарына бағышлап, Алла бирһә, Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллыҡ юбилейына әлеге йыйынтыҡтың өр-яңы вариантын әҙерләргә ниәтләйем. Тереләр өсөн ғибрәт булырлыҡ иҫтәлек-хәтирәләр бихисап, бәғерҙәребеҙгә һуғыш һалған яралар ҙа тере әле...

***Дилә ФӘХРИСЛАМОВА, Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика интернат-гимназияһының 11-се синыф уҡыусыһы:*** Минең олатайым Фәхрисламов Хабрахман Абдулла улы Әбйәлил районы Үтәгән ауылында тыуған. Атау, Хабрахман һәм Фәйзрахман исемле өс ул тәрбиәләнгән был ғаиләнең татыу һәм матур тормошон Бөйөк Ватан һуғышы емерә. Ғаилә башлығы Абдулла олатайым 1941 йылда фронтҡа алына һәм 1942 йылда батырҙарса һәләк була. 1937 йылда Ҡыҙыл Армия сафына алынған Атау олатай 1941 йылдың 22 июнен Украинала ҡаршылай. Яуҙаштары менән бергә ул фашистарҙың тәүге үлемесле һөжүменә ҡаршы тора. Капитан дәрәжәһенә күтәрелгән Атау олатайға фронттан әйләнеп ҡайтырға насип бумай, ул Польша биләмәһендә барған ҡаты алыштарҙа һәләк була. 1942 йылда Фәхрисламовтар ғаиләһенән 19 йәшлек Хабрахманды ла һуғышҡа алып китәләр. Ауылдаштары Фәтих Ҡужин, Әсхәт Йәһүҙин, Әкрәм Ғәлләмов кеүек тиҫтерҙәре менән бергә ул фронтҡа китә. Олатайым 214-се дивизияның 780-се уҡсылар полкы составында һуғышҡа инә һәм Сталинград һуғышының башынан аҙағына тиклем ошо мәхшәр эсендә була. Ҡаты яраланғандан һуң 1944 йылдың мартында ул тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта. Тылда ла олатайыма оло һынауҙар үтергә, һуғыш һәм унан һуңғы ауыр йылдарҙа оло эштәр башҡарырға тура килә. 1945 йылда өләсәйем Камила Ҡәүей ҡыҙы менән тормош ҡороп, 8 балаға ғүмер биргәндәр. Бөгөнгә көндә олатайым һәм өләсәйем балалары, ейән-ейәнсәрҙәре, бүләбүләсәләренең ҡәҙер-хөрмәтен күреп, иғтибарын һәм ихтирамын тойоп ғүмер итә. Амангилде ауыл советы биләмәһендә ҡалған берҙән-бер һуғыш ветераны олатайыма һаулыҡ теләйем һәм Еңеү көнө менән ҡотлайым!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**2012 йылдың икенсе яртыһында ла өйҙәрегеҙгә "Киске Өфө" гәзите килеүен, уның аша зиһенде ҡуҙғытыр, йөрәкте яғырытыр, рухты күтәрер, сәмгә ут һалыр мәғлүмәт алырға теләйһегеҙме? Улайһа, июнь айы бөткәнсе почтаға инеп, баҫмабыҙға яҙылыу мөҙҙәтен оҙайтырға онотоп ҡуймағыҙ.**

Кем "Киске Өфө"гә май айында яҙылған, квитанцияһын редакциябыҙға ебәреп, бәхетен һынап ҡараһын: **өс кеше "400 башҡорт халыҡ йыры" китабына эйә буласаҡ** (ә апрелдә еңеүселәрҙе киләһе һанда хәбәр итербеҙ).

Квитанцияларығыҙ менән бергә **тыуған көндәрегеҙҙе лә** хәбәр итегеҙ. Гәзитебеҙ аша уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, танышҡарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

"Киске Өфө"нөң индексы - 50665. **2012 йылдың икенсе яртыһына яҙылыу хаҡы - 354 һум 24 тин.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Мәскәүҙә Башҡортостан көндәре булып үтте. Мәскәүҙең Халыҡ-ара Музыка йортонда республика Президенты Рөстәм Хәмитов менән баш ҡала мэры Сергей Собянин Башҡортостан һәм Мәскәү араһында сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник һәм социаль-мәҙәни хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Билдәләнеүенсә, Башҡортостан менән Мәскәү араһындағы тауар әйләнеше 20 миллиард һумдан ашыу сумманы тәшкил итә.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "2012 йылда Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты федераль дәүләт бюджет учреждениеһының 80 йыллығына арналған сараларҙы әҙерләү һәм үткәреү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы.

✓Өфөлә "Таҙа юлдар - таҙа ҡала" эко-акцияһы үтте. Акцияны үткәреү урыны итеп баш ҡалалағы туктальштарҙың береһе - "Дан бульвары" һайланды. Сара барышында ойоштороусылар йөҙҙән ашыу автомобилде туктатты, уларҙың водителдәре йыйылған суп-сарҙы тапшырып, урынына "Мин таҙа ҡала яҡлы" тип яҙылған йәшел таҫма алды. Бынан тыш, "Таҙа юлдар - таҙа ҡала" акцияһы сиктәрендә автомобилистарға РФ Һыу кодексының талаптары аңлатылды.

✓Башҡортостан Республикаһында Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылының эмблемаһы раҫланды. Конкурс БР Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығы тарафынан үткәрелде. Йыл эмблемаһын эшләүгә конкурс барышында комиссия ҡарары менән Нәсих Хәлисовтың эше иң яҡшыһы тип танылды. Ул йылдың рәсми символикаһы булараҡ раҫланды.

✓Бөгөн Башҡортостан Республикаһында автомобиль юлдарын төҙөкләндереү айлығы старт алды. Тейешле ҡарар республика Хөкүмәте бойороғо менән раҫланған. 2 майҙан 2 июнгә тиклем төбәктә автомобиль юлдарын һәм юл яны инфраструктураһын төҙөкләндереү саралары, шул иҫәптән автоюлдарҙы ремонтлау, юл яны һыҙаттарын йәшелләндереү эштәре көсәйтеләсәк. Айлыҡҡа 30 июнгә тиклем йомғаҡ яһаласаҡ.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

**"Алтыға берҙе ҡушып, һан ун булмай, сәғәтте алға бороп, төн көн булмай..." тигән мәшһүр Аҡмуллабыҙ. Ә бына тәүге сифатында төрлө-төрлө булған әйберҙәрҙе йә төшөнсәләрҙе бергә ҡушып, өсөнсө төрлө аталған әйбер-берләшмә барлыҡҡа килеүен фәндә синтез тип атайҙар. Мәҫәлән, кислород менән водородты ҡушһаң - һыу, әҫе менән һыуыҡты ҡушһаң - быу, белем менән тәжрибәне ҡушһаң - зирәклек, икмәк менән майҙы ҡушһаң - бутерброд, һыу менән ондо ҡушһаң - ҡамыр, эт менән бүрене ҡушһаң - бүрэт барлыҡҡа килә. Спартак Ильясовтың "Сағымдағы олоу" бәйәненә тап ошо бүрэт этногенезы мәсьәләһе лә ҡүтәрелә.**

# ЙӘН ТАРТМАҺА ЛА...

## ҡан тарта



Әйткәнебеҙсә, ата бүре Боғаҡ һәм көсөктәре һәләк булғандан һуң япа-яңғыҙ тороп ҡалған инә бүре Тупыс яңы ғаилә ҡорор ишен эҙләп, оҙаҡ ваҡыт донъя ҡыҙырғандан һуң, Шәйхетдиндең Дусбай (Тупыс өсөн Һоро) тигән эте менән йәрәшә. Эт менән бүренең бындай яҡын мөнәсәбәтен тәүгә күргән Шәйхетдин башта был хәлгә аптырай, аҙаҡ һуғыш ваҡытындағы төрлө милләт вәкилдәренең ғаилә ҡороуҙарын иҫенә төшөргәндән һуң, тынысланa төшә. Әммә был тынысланыу ваҡытлыса ғына була, барлыҡ проблемалар Тупыс менән Һоронан яралған көсөктәр донъяға килгәндән һуң башлана ла инде. Сөнки ғаилә башлығы булған арлан Һоронoң үҙ ғаиләһе өсөн яуаплылыҡ тойғоho бөтөнләй юҡ, башта әйткәнебеҙсә, ҡасандыр бүре булып, эткә әүерелгән был заттар әсә булырға йөрөгән иптәшенә генә түгел, хатта үҙ балаһына үгәй итеп ҡарай, улар өсөн кем ашата - шул хужа, ҡайһы урында ашаталар - шул урын уның тыуған ере, йорто. Һороноң бындай халәтен автор түбәндәгесә аңлата: "...Һороно ул ояһы янында һәр саҡ көтә. Килер, ҡоҫоп ашатыр, бәлки, ҙурыраҡ киҫәк айырып алһа, алып килер, тигән өмөтө бар. Ләкин менәрләгән йылдар буйы кеше ҡулында әҙер аҙыҡ ашап өйрәнгән эт ғаилә ашатыу тигән тойғоhон күптәнән юғалтҡан. Бигерәк тә арландары. Көсөктәрен ҡарынында йөрөткән Тупысты ашатыу йә башҡа ҡурҡыныстан ҡурсалау тигән сифат Һорола юҡ. Ҡыҫҡаһы, Һороға ышанһа, Тупыс астан үләсәк..."

Ошо хәлгә шаһит булған Шәйхетдин ҡаҡ һөйәккә ҡалған Тупысҡа ярҙам итергә теләп, уның алдына ризыҡ ҡуя. Әммә, билдәле, ризыҡты Һоро ғына ашай. Ахырҙа Шәйхетдин мәңге туймаҫ этен бәйләп ҡуйырға мәжбүр була. Әммә бынан һуң да һәр ваҡыт үҙ көсө менән тапҡан хәләл ризыҡҡа ейенеп өйрәнгән Тупыс Шәйхетдин биргән ризыҡ менән аҙ ғына, үлмәҫлек кенә тамаҡ ялғай ҙа, көсөктәренә ризыҡ хәстәрләп, ҡырға китә, сөнки бүреләргә әрәмтамаҡлыҡ хас түгел. Тупыс шул китеүенән көсөктәре янына әйләнеп ҡайта алмай. Уның Шәйхетдин йорто янында астан-ас ҡалған көсөктәренең береһе һыуға төшөп һәләк була, икенсеһен бөркөт тибә. Иҫән ҡалған өсөнсө көсөк-бүрэт Етем менән Шәйхетдин араһын Һоро-Дуҫбай ялғай. Етем дә, уның атаһы Һоро ла хужалары иҫән саҡта аслыҡ күрмәй көн итә, бергәләп һунарға йөрөйҙәр. Әммә Шәйхетдин вафат булғандан һуң улар икеһе лә, ысынлап та, етем ҡала, дөрөҫөрәге, бүрэт Етем, атаһы иҫән көйө етем ҡала.

Авторҙың әҫәрҙә әйтергә теләгән төп фекере, минеңсә, тап ошо Шәйхетдин үлгәндән һуң барлыҡҡа килгән хәл-күренешкә бәйле лә. Йәғни бында уҡыусы тарафынан һуғышта әсирлектә булғандан һуң властар тарафынан ҡыйырһытылыуға һәм эҙәрлекләнеүгә дусар ителгән Шәйхетдиндең вафат булыуы фажиғә итеп ҡабул ителмәй, был хәл факт булараҡ ҡына теркәлә. Автор әйтергә теләгән иң төп фекер: кеше үлгәндән һуң эт менән бүренең ҡанынан яралыуҙан тыуған өсөнсө заттың йәшәүгә бөтөнләй яраҡһыҙ булыуында. Бүрэт Етем бер яҡтан эт рәүеше алып, тулыһынса кешеләргә лә яҡынлап өлгөрмәй, икенсе яҡтан, бүре булып, тәбиғәт стихияһында ла йәшәүҙән айырыла һәм ике урталыҡта тороп ҡала. Ул эт тә, бүре лә түгел, ике урталыҡта тороп ҡалыусы бүрэт, ғилми телдә әйткәндә - маргинал. Бүрэт Етем хәҙер инде бер кемгә лә кәрәк түгел, эттәргә лә, бүреләргә лә, хатта кешеләргә лә. Атаһы Һоро-Дуҫбай тәүге мөмкинлек сығыу менән үҙен ашатҡан кешегә эйәреп китәсәк, ашатҡан кешенең йортон үҙенең ояһы итәсәк һәм донъяла үҙенең Етем тигән көсөгө барлығын бөтөнләйгә онотасаҡ. Сөнки эттәрҙә үҙ затына ҡарата ҡан тартыу көсө бөтөнләй юҡ, дөрөҫөрәге, шул көс юҡҡа сыҡҡан өсөн дә улар эткә әүерелгән. Эт - үҙ тәбиғәтенә хыянат итеүсе, ауыһыҙҙан да ауыуыҙ, ҡатынан да ҡаты тәбиғәт ҡанундарын ҡүтәрә алмайынса, кешеләргә килеп баш һалыусы һәм ялағайланыуы арҡаһында бар тереклек алдында "эт" ҡушаматы алыусы бүре. Ул үҙ-үҙен, ғаиләһен, тоҡомон ҡайғыртып йәшәүҙе онотҡан, әҙәмдә "дәүләт дотацияһы" итеп күреүсе мәхлүҡ йән, бер ваҡытта ла донор була алмаусы субъект.

Ә инде эттән һәм бүренән тыуыусы затҡа килгәндә, уныһы тағы ла хәтәрерәк. Эттәр һәм кешеләр унан, бүре, тип тайшана, бүреләр иһә, үҙен эттәргә һәм кешеләргә һатылғаны өсөн күрәлмай. Бүрэт тота килеп ҡырға сығып китеп, бүре булып китергә лә әҙер, хатта ул һунар итә лә белә, әммә ҡанына һеңгән "этлеге" уны ауыл янында ебәрмәй тота, ә ҡанға һеңгәнде йыуып та, юнып та бөтөрөп булмай. "Таянырға, тормош өлгөһөн, тәбиғәт ҡанунын булмышына ярашлы тулыһынса өйрәнер өсөн ата-инәһе, туғандары ла юҡ. Кеше янында үткәргән сағыштырмаса еңел тормош уны көнө-төнө эҙләнеп, тик үҙ табышына ғына таянып йәшәү ҡанунынан бер аҙ ситләштерҙе. Яңы тормош ҡағиҙәһенә өйрәнә алырмы, әллә аслыҡтан һәләк булырмы?"

Спартак Ильясов бүреләр, эттәр һәм бүрэттәр тормошон бәйән итеп, асылда, кешелектең һуңғы ике быуатта, бигерәк тә XXI быуат башында бүрэт халәтендә тороп ҡалғандарға ишара яһап, беҙҙе ҙур бер фажиғәнән иҫкәртә кеүек. Беҙ барыбыҙ ҙа шул бүрэт Етем кеүек ике арауыҡта баҫып тормайбыҙмы ни? Береһендә формалашҡан, икенсеһендә йәшәргә мәжбүр ителгән ике ижтимағи ҡоролош араһында, меңәр йыллыҡ тәжрибә тупланған тарихыбыҙ менән аныҡ маҡсаттары булмаған билдәһеҙ киләсәк араһында, ғөрөф-ғәҙәтебеҙ, йола традицияларыбыҙ менән глобаллашеү араһында, ожмах менән тамуҡ араһында, көн менән төн араһында, милләт менән милләт араһында, ауыл менән ҡала араһында, аҡыл менән тойғо араһында, матди байлыҡ менән рух араһында, йөрәк менән күңел араһында, йән менән тән араһында һәм һуңғыһы - йәшәү менән үлем араһында...

Күреүебеҙсә, ниндәйҙер ике арауыҡта, аңлайышһыҙ халәттә, мәғәнәһеҙ ысынбарлыҡта ҡалған тере йән эйәһе, әгәр ҙә ниндәйҙер аныҡ билдәләнеш алмаһа, оҙаҡ тора алмай. Ул был осраҡта үҙ асылын үҙгәртергә, башҡаса йәҙ алырға йә булмаһа үҙ асылын һаҡлаған көйө яңыса йәшәү рәүешен үҙләштерергә бурыслы. Кем белә, бәлки, илебеҙ етәкселәре "модернизация" тип туҡтауһыҙ тылҡыған төшөнсә ошоно аңлаталыр? Билдәһеҙлек - өмөтһөҙлөккә, өмөтһөҙлөк һәләкәткә килтерә. Бындай осраҡта әҙәм балаһы үҙенең ҡандаш туғанына, ғаиләһенә, зат-нәҫеленә таянып ҡына үҙен һаҡлап ҡала ала. Милләт тә үҙен һаҡларлыҡ һәм яҡларлыҡ дәүләт механизмынан яҙһа, үҙен бары тик ҡан тартыу көсө, туғанлыҡ хисе менән генә һаҡлай ала. Мең йылдан ашыу үҙ асылын ошо рәүешле һаҡлап, аҙаҡ дәүләтен аяҡҡа баҫтырыуға өлгәшкән йәһүдтәр бының аныҡ миҫалы була ала. Йәндәрҙең туғанлығы юҡ, әммә ҡан тартыу көсө бар. Киләсәктә кешелекте һәр төрлө идеологиянан тыш бары тик ҡан яҡынлығы, туғанлыҡ хисе генә ҡотҡарып ҡаласаҡ. Бүреләрҙең асылы уларҙың йыртҡыслығында түгел, ә үҙ зат-тоҡомона ҡарата булған тоғролоғонда. Кем белә, бәлки, ошо тоғролоҡ уларҙы уҫал итеп формалаштырғандыр, аҙау теше иткәндер...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кемгә нисектер, мине бына ошондай уйҙарға һалды Спартак Ильясовтың "Сағымдағы олоу" бәйәне. Мин был әҫәрҙе ғилми лөғәткә күсереп, "Сағымдағы олоу, йәки Бүрэт этногенезы" тип тә атар инем. Бәлки, яҙғандарымда тәбиғәт күренештәрен, тәбиғи процестарҙы кешелек йәмғәтселеге, ижтимағи тормош мохитенә күсереп, ҙур хата ла яһайымдыр, әммә мин тағы ла бер хәл-күренештең асылына һаман да төшөнә алмайым: ни өсөн кешеләр араһында "бүреләр ҡануны" хөкөм һөрә башлаһа, кешеләр күпләп эт аҫырай башлай һуң?**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Аҙағы. Башы 16-сы, 17-се һандарҙа.)**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Өфө Эшҡыуарҙар берләшмәһенең йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһендә май айында бәләкәй һәм урта бизнес субъекттары эшмәкәрлегe буйынса түләүһеҙ өс консультация үткәрелә. 15 майҙа "Бизнес-партнер" ауаплылығы сикләнгән йәмғиәте директоры урынбаҫары Диана Киселева, 22 майҙа адвокат Фидель Фәтхиев, 29 майҙа "Өфө ҡалаһындағы "Рәсәй" ғүмерҙе страховкалау йәмғиәте" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте директоры урынбаҫары Ирина Буравова консультация бирә. Консультациялар 16 сәғәттән 18-гә тиклем үткәрелә. Алдан теркәлеү мотлаҡ. Белешмәләр өсөн телефон: 241-47-44.

✔Башҡортостанда түләүле юл барлыҡҡа киләсәк. Бында Баулы (Татарстан) - Күмертау республика трассаһы тураһында һүҙ бара. Уның төҙөлөшө быйыл уҡ башланып, күҙаллаңыуынса, 2015 йылда тамамланырға тейеш. БР Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты коллегияһы ултырышында билдәләнеүенсә, был проект "Европа - Көнбайыш Ҡытай" халыҡ-ара транспорт коридорын булдырыу сиктәрендә тормошҡа ашырыла. Юл төҙөлөшөнә яҡынса 102 млрд. һум тотоноу планлаштырыла. Трассанан файҙаланған өсөн түләүгә килгәндә, еңел автомобилдәр өсөн ул 1 километрына яҡынса 70 тин, йөк машиналары өсөн 1 һум 60 тин буласаҡ.

✔17-18 майҙа Өфөлә үтәсәк "Ҙур химия" халыҡ-ара форумында республика предприятиеларының нефть-газ консорциумын ойоштороу тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйыласаҡ. Консорциум - ул һөйләшеүҙәрҙе хөкүмәт кимәлендә алып барыу мөмкинлеге, тап ошо ҡаты власть вертикале булдырылған илдәрҙә бизнес алып барыуҙың төп шарты булып тора ла инде. Бөгөн предприятиеларыбыҙҙың береһе - Благовещен арматура заводы - Иранда үҙенең мөмкинлектәрен тәҡдим итә. Алжирҙың Энергетика һәм файҙалы ҡаҙылмалар табыу министрлығы Башҡортостан предприятиеларына геологик разведкалау һәм фосфат сығарыу буйынса бер нисә тендерҙа ҡатнашырға тәҡдим итте. Ғөмүмән, Башҡортостандың консорциум кеүек идара компанияһы ярҙамында Вьетнам, Көньяҡ-Көнсығыш Азия, Африка, ғәрәп илдәре баҙарына сығыу мөмкинлеге ҙур.

**"Башинформ"дан.**

✓ *"Шайморатовҡа Герой исеме бирергә өлгәшеребеҙгә өмөт бар", тип, киләсәктә был мәсьәләнең ыңғай хәл ителеренә өмөт уятҡан Илүзә Ғәйнуллина әйтеүенсә, ҡултамғалар йыйыу әле лә дауам итә.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# КИЛЕГЕҘ, ҠАТНАШЫҒЫҘ!

**Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 67 йыллығы алдынан баш ҡала тормошо мәҙәни һәм спорт сараларына бай буласаҡ. Сараларға бөтә ветерандарҙы, тыл хеҙмәткәрҙәрен йәлеп итеү, балалар, йәштәр ҡыҙыҡһынырлыҡ уйын-конкурстар үткәреү күҙаллана.**

Өфөлә тантаналы митингылар, хеҙмәт коллективтарының байрам программалары ойоштороласаҡ. Мәктәптәрҙә ветерандарҙы саҡырып, батырлыҡ дәрестәре үткәрәсәктәр, шулай уҡ балалар өсөн ҡаланың иҫтәлекле урындарына экскурсиялар ойоштороласаҡ. Музыка, сәнғәт мәктәптәрендә, гәҙәттәгесә, тематик конкурстар, концерттар, күргәҙмәләр йөҙәрләгән тамашасыны үҙенә йәлеп итәсәк.

- Байрамға әҙерлек барышында ремонт һәм төҙөкләндереү эштәре башҡарыла, - тип һөйләне журналистар менән матбуғат конференцияһында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов. - Юлдар төҙөкләндерелә, ҡала майҙандары тәртипкә килтерелә. Ҡаланы байрамса биҙәр өсөн баннерҙар, плакаттар әҙерләнә. 1-10 майҙа һуғыш ветерандары һәм уларға тиңләштерелгән граждандар, шулай уҡ ветерандарҙы оҙатып йөрөүселәр троллейбус, трамвайҙарҙа бушлай йөрөй ала. Сауҙа нөктәләре, баҙарҙарҙа шулай уҡ ташлама хаҡтар ҡаралған. Бынан тыш, йөҙҙән ашыу хеҙмәтләндереү предприятиеһы ветерандарға льготалы хеҙмәттәр тәҡдим итәсәк...

**5 майҙа** Ҡала мәҙәниәт һарайында ойошторолған байрам концертына 800 һуғыш ветераны саҡырылған. Һәр ветеранға бүләктәр тапшырыласаҡ.

**9 майҙа** "Еңеү" паркында республика етәкселеге ҡатнашлығында Муса Гәрәев ҡәберенә, Миңлегәли Шайморатов һәм Таһир Күсимов бюстарына сәскәләр һалыу тантанаһы үтәсәк. Артабан парктағы байрам сараларын Орджоникидзе районының үҙешмәкәр коллективтары дауам итәсәк.

Рус академия драма театры эргәһендә ҡала халҡы һәм Өфө ҡунаҡтары "Еңеү йырҙары" тип исемләнгән концерт ҡарай аласаҡ. Байрам саралары ҡаланың башҡа райондарында ла ойоштороласаҡ. Бөйөк Еңеүгә арналған тантаналарҙы 23 сәғәттә Ленин майҙанындағы фейерверк тамамлаясаҡ.

**4-9 майҙа** "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында бокс буйынса ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев исемендәге Бөтә Рәсәй мемориалы үтәсәк. 10 майҙа Конгресс-холда патриотик йырҙар башҡарыу буйынса "Тыуған ер батырҙары" ҡала конкурсы ойоштороласаҡ.

**6 майҙа** ҙур сара - 64-се еңел атлетика эстафетаһы үтәсәк. Ветерандарҙың күбеһе эстафетаны күҙәтеп кенә ҡалмай, ә үҙҙәре лә стартҡа баҫасаҡ. Был сара тормош тотҡаһын яңы быуынға тапшырыу символына әүерелеп, йылдан-йыл үҙ әһәмиәтен үҫтерә бара. Теләгән һәр кеше йүгерә ала. Быйыл эстафетаға 200 команда һәм 2500 ҡатнашыусыны йәлеп итеү көтөлә. Эстафета маршруты Туҡай, Зәки Вәлиди, Ғафури, Пушкин, Совет урамдары буйлап үтә. Старт һәм финиш - Динамо стадионында. Транспорт өсөн 11 сәғәттән 14-кә тиклем юл ябыҡ буласаҡ. Эстафетанан тыш, һуғыш йылдарындағы техника оҙатыуында тантаналы парад ойоштороласаҡ. Шулай уҡ ветерандар өсөн ялан кухняһы әҙерләнәсәк, Александр Матросов (Шәкирйән Мөхәмәтйәнов) һәйкәленә сәскәләр һалынасаҡ. Быйыл сараны баш ҡаланың музыкаль коллективтары ла биҙәйәсәк.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Республикала "Комдив Шайморатов. Геройҙың ҡайтыуы" тип исемләнгән акция ойошторолғайны. Уның маҡсаты - легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, генерал Миңлегәле Шайморатовҡа "Рәсәй Геройы" исемен биреүгә өлгәшеп, тарихи ғәҙеллекте тергеҙеү. Был проектты хуплаған ҡултамғалар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейында туплана. Сара барышы менән ҡыҙыҡһынып, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейы мөдире Илүзә ҒӘЙНУЛЛИНАға мөрәжәғәт иттек:**

# БЕРГӘЛӘШҺӘҢ...

## эш берегә



- Былтыр ноябрҙә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының 70 йыллығына арнап уҙғарылған ғилми-ғәмәли конференция ваҡытында ла, унан һуң да "Ни өсөн Шайморатовҡа Герой исеме һаман бирелмәгән?" тигән һорау тағы ҡҡтәрелде. Билдәле булыуынса, Шайморатовҡа Герой исеме юллау 1948 йылда уҡ -Украинаның Ворошиловград өлкәһе (хәҙерге Луганск өлкәһе) Петровск ҡалаһында уның мәйетенә эксгумация эшләгәндән һуң башлана. Шайморатовтың иҫән ҡалған яуҙаштары уның яу яландарында күрһәткән батырлыҡтары тураһында йәмәғәтселеккә хәбәр итә, генералға Герой биреүҙе һорай, әммә уларҙың теләге бойомға ашырылмай ҡала. Был ваҡиғаларға алтмыштан ашыу йыл үткәс, тиҫтә йылдан ашыу ваҡыт үткәс, Шайморатовтың исемен мәңгеләштереү маҡсатында Республика хәрби дан һәм 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейҙары хеҙмәткәрҙәре батыр һәләк булған урында - Украинаның Петровск ҡалаһында сквер эшләткән, гранит һәйкәл ҡуйҙырған. Бөтә был эштәргә музей мөдире Илүзә Ишмөхәмәт ҡыҙының тырышлығы ла һалынған. Музей етәкселеге, Миңлегәле Шайморатовҡа арнап, өс ҙур фәнни-ғәмәли конференция, шул иҫәптән бер халыҡ-ара кәңәшмә уҙғарған. Уларҙа Рәсәйҙең төрлө тарафтарынын килгән ҡунаҡтар - тарихсылар һәм шул төбәктәрҙән сыҡҡан кавалеристарҙың балалары, ейәндәре ҡатнашҡан.

Бөгөнгө көндә акция сиктәрендә гвардия генералы Шайморатовҡа "Рәсәй Геройы" исеме биреү өсөн йөҙ меңдән ашыу ҡултамға йыйылған. Күрше дәүләттәрҙән, Рәсәйҙең төрлө өлкәләренән, шулай уҡ йәмәғәт ойошмалары менән бер рәттән, дәүләт ойошмаларынан да был проектты хуплаған хаттар килеүен билдәләне Илүзә Ғәйнуллина. Республикабыҙ ҡалалары һәм райондары ла әүҙемлек күрһәткән был изге сарала. Беренселәрҙән булып был идеяны Әбйәлил, Учалы, Баймаҡ, Ҡырмыҫҡалы райондарында һәм Салауат ҡалаһында йәшәүселәр күтәреп алыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды ул.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**"Комдив Шайморатов. Геройҙың ҡайтыуы" тип исемләнгән акция башланыуға бик аҙ ғына ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, батыр рухын шатландырырға, уның хәтерен халҡыбыҙ күңелендә мәңгеләштерергә теләүселәр һаны күплеге ҡыуандыра беҙҙе. Халҡыбыҙҙа "Ил төкөрһә, күл була" тигән бик тапҡыр әйтем барлығы иҫкә төштө был акцияға килгән хаттар һаҡланған бүлмәнән сыҡҡан саҡта. "Битарафбыҙ" тип, үҙ-үҙебеҙҙе тәнҡитләүҙән бушамаһаҡ та, ысынбарлыҡта ғәмебеҙҙе белдерер кешеләр бар икән әле арабыҙҙа. "Шайморатовҡа Герой исеме бирергә өлгәшеребеҙгә өмөт бар", тип, киләсәктә был мәсьәләнең ыңғай хәл ителеренә өмөт уятҡан Илүзә Ғәйнуллина әйтеүенсә, ҡултамғалар йыйыу әле лә дауам итә. Адресы: 450095, Өфө ҡалаһы, Левитан урамы, 27. Телефондар: (347) 227-52-02, 227-47-57.**

**Илгизәр БУЛАТОВ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТӨБӘК БАШЛЫҠТАРЫ...

## һайлап ҡуйыласаҡ

**Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев тарафынан Дәүләт Думаһына ҡарауға тәҡдим ителгән губернаторҙарҙы һайлап ҡуйыу тураһындағы закон проекты 25 апрелдә һуңғы уҡыуҙа ҡабул ителде. Яңы закон төбәк башлыҡтарының һайлап ҡуйылыуын күҙ уңында тота, әммә кандидаттар күрһәтеүгә сикләү, тип хәбәр итә "Интерфакс".**

Законға ярашлы, Рәсәйҙең 30 йәштән өлкән граждандары - партияларҙан күрһәтелгәндәре лә, үҙҙәрен үҙҙәре күрһәтеүселәр ҙә (әгәр төбәк быны кәрәк тип тапһа) губернаторлыҡҡа һайлана аласаҡ. Үҙҙәрен үҙҙәре күрһәткәндәргә, үҙен яҡлап, төбәктәге барлыҡ һайлаусылар иҫәбенең 0,5- 2 проценты күләмендә (аныҡ һанды төбәк үҙе билдәләй) ҡултамға йыйырға тура киләсәк.

Законда ҡаралғанса, губернаторлыҡҡа кандидаттар төбәктең кәм тигәндә 3/4 муниципаль берәмеге депутаттарының 5-10 процентында яҡлау табырға тейеш (был диапазондағы аныҡ күрһәткесте төбәктәр үҙаллы билдәләй). Шул уҡ ваҡытта депутаттар ни бары бер генә кандидатҡа тауышын бирә ала.

Кәрәк булғанда, һайлау ике турҙа үткәреләсәк - унда еңеү өсөн участкаларға килгән һайлаусыларҙың 50 проценттан ашыу тауышын йыйырға кәрәк буласаҡ. Законда төбәк башлыҡтарының юғары вазифаны рәттән ике тапҡырҙан ашыу биләй алмауы ла күрһәтелгән. Уға ярашлы, тәүге губернатор һайлауҙары 2012 йылдың көҙөндә үтәсәк, тип көтөлә.

**Людмила ТЕРНОВАЯ.**
**"Башинформ".**

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда ветерандар йәмәғәт транспортында бушлай йөрөй ала. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһы шундай бүләк эшләне. Акция республикала кисә башланды һәм 10 майға тиклем дауам итәсәк. Ветерандар һәм уларға тиңләштерелгән кешеләр дәүләт предприятиеһының ҡала эсендәге, ҡала яны һәм ҡала-ара автобус маршруттарында бушлай юл йөрөү хоҡуғынан файҙалана ала. Ә Өфөлә ошо уҡ арала ветерандар трамвай һәм троллейбустарҙа ла бушлай йөрөй ала. Бушлай юл йөрөү хоҡуғынан файҙаланыр өсөн танытма ғына күрһәтергә кәрәк.

✓11 майҙа Өфөнөң Октябрь районы 35 йыллығын билдәләй. Тантаналы кисә Дәүләт академия рус драма театрында үтәсәк. Юбилей тантаналары алдынан районда ҙур әҙерлек эштәре алып барылған: районда конкурстар, музыкаль фестивалдәр, спорт ярыштары, күләмле экологик акциялар үткәрелгән.

✓Өфө 2012-2013 йылдар миҙгелендә Burton сноуборд-парктары төҙөләсәк ҡалалар иҫәбенә инде. Хәтерегеҙгә төшөрәйек, Рәсәйҙең 13 ҡалаһында Burton Parks төҙөү өсөн ике аҙна дауамында тауыш биреү алып барылды. Өфөнән тыш, Ҡаҙан, Абакан, Ижевск, Мурманск, Петропавловск-Камчатский, Южно-Сахалинск, Владивосток, Һарытау, Төмән, Барнаул, Ырымбур, Яр Саллы ҡалалары ла еңеүселәр исемлегенә ингән.

✓Башҡорт дәүләт филармонияһында 11 майҙа Башҡортостандың халыҡ артистҡаһы Әнисә Яхина "Йәшәрәм йәшен йәшнәгәндә" тип аталған юбилей кисәһенә саҡыра. Концертта Флүрә Килдейәрова, Нәзифә Ҡадирова, Фәрит Бикбулатов, Тәнзилә Үҙәнбаева, Вәхит Хызыров һәм башҡа артистар ҡатнаша. 14 майҙа ижад миҙгелен ябыу концерты була. Ҙур тамашала филармония артистары ҡатнаша.

✓11 майҙа "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артистҡаһы Рәшиҙә Туйсинаның юбилей кисәһе була. Билеттар ҡала кассаларында һатыла.

***✓ Аллаға шөкөр, ҡамауҙы йырып сыҡтыҡ. Ни өсөн башҡорт егеттәре әсирлеккә төшмәй? Сөнки халҡыбыҙ бер ваҡытта ла ҡоллоҡта йәшәмәгән - азатлыҡты иң ҙур байлығы һанаған.***

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

# БАШҠОРТТАР ӘСИРЛЕККӘ ТӨШМӘНЕ,

## үлемде артыҡ күрҙе

(Башы 1-се биттә).

### Ат менән - танкыға ҡаршы

Магнитогорск металлургия комбинатында газ һәм электр менән иретеп йәбештереүсе булып эшләп йөрөй инем. Ҡаҙаҡ АССР-ының ул ваҡытта яңы ғына төҙөлөп, үҫешә башлаған Ҡарағанда ҡалаһына эшкә ебәрҙеләр. Һуғыш башланыуы тураһындағы шомло хәбәрҙе шунда ишеттем. Күп тә үтмәне, Алма-Ата ҡалаһына военкоматҡа саҡыртып алдылар. Ошо ҡалала хәрби әҙерлек үткәс, 1943 йылдың апрель айында фронтҡа оҙатылдыҡ. Беҙ 16-сы гвардия атлылар дивизияһының Таһир Күсимов етәкселегендәге 58-се полкының 4-се эскадронына ҡушылып, пулеметсылар взводы көстәрен тулыландырҙыҡ. Пулеметтарыбыҙ тачанкала, йәки ҡушарлап йә өсәрләп егелгән аттарҙа урынлаштырылғанлыҡтан, беҙ ҙә аттар менән эш итеүселәр булып сығабыҙ бит инде. Ат, тигәндән, бер аҙға ғына ситкәрәк тайпылып, был юҫыҡтағы уй-фекерҙәрем менән бүлешмәйенсә булдыра алмайым. Халҡыбыҙҙағы атанан улға күсә килгән ат тәрбиәләү тәртиптәре, атта төрлө акробатик элементтар эшләү бөгөн онотолоп бара. "Егетлек"те генә алып ҡарайыҡ. Бөгөн ат менән профессиональ шөғөлләнгән артистар ғына "егетлек" күрһәтә: сабып барған килеш алда барыусы ҡулынан яулыҡ тартып алыу булһынмы, ат өҫтөндә аяғүрә баҫып сабыумы - былар барыһы ла бөгөн бары тик цирктарҙа ғына һаҡланып ҡалған. Ә беҙ йәш саҡта барыбыҙ ҙа атта оҫта саптыҡ. Мин дә аттан төшмәнем, еңел, сос инем. Ни өсөн ат тураһында һүҙ ҡуҙғатыуымды аңлағанһығыҙҙыр: атлы ғәскәрҙә һуғышҡас, минең өсөн ат - ул бик ҡәҙерле хайуан булды. Әйтәйек, төнгө рейдҡа сығып китһәк, бер аҙға ғына ялға туҡталыуыбыҙ була, иң тәүҙә аттарыбыҙҙы ҡайғыртып, уларға һоло биреп, һыу эсерә инек. Атҡа ысын күңелдән ышанһаң, уны яратһаң, ул да һине яҡын күрә: бәрхәт һымаҡ йомшаҡ ирендәре менән ҡулыңды һыйпай, рәхмәтен шулай белдерә. Аттар беҙҙе үлемесле яландарҙан да йыш ҡына ҡотҡарып алып сыҡты. Березино районында ҡасып барыусы дошман колоннаһының тылына сығып, атыша-атыша 30 метр самаһы ғына арала окоптар ҡаҙып урынлашып, бер төркөм дошман техникаһын ҡамап алдыҡ бер көн. Ҡаты яу булырын һиҙеп, ауыл халҡы, башлыса ҡатын-ҡыҙ, бала-саға һәм ҡарт-ҡоро, урмандарға ҡасып бөттө. Бер ваҡыт 17 самолеттан торған дошман эскадрильяһы беҙгә һөжүм итә башламаһынмы! 7 тапҡыр ҡабатланды һөжүмдәре. Һуңғы һөжүмдәрендә беҙ баҫып алған техниканы тар-мар итеп киттеләр, бер тапҡыр беҙҙең өҫтән осоп, Березино районын утҡа тоттолар. Шул ваҡыт беҙгә аттарҙы алып килделәр һәм беҙ тачанкаларға пулеметтарҙы ултыртып, үҙебеҙ аттарҙың ялына, ҡойроғона тотоноп, дошман самолеттары һөжүменән ҡасып, урманға ышыҡҡа инеп юғалдыҡ. Урман эсендә кәрәк-яраҡтарҙы теүәлләп, аттарҙы ял иттереп алғас, Днепрҙы кисеп сығыу хәрәкәтен башланыҡ. Беҙ, бер эскадрон самаһы һалдат, ҡаршы яҡ ярға килеп сыға алдыҡ. Днепрҙы алыуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн мин белгән өс кешегә: полк командирыбыҙ Таһир Күсимовҡа һәм үҙҙәре һәләк булғандан һуң Әбйәлил районы Хәлил ауылы егете, взводыбыҙ командиры Ғәбделрәүеф Дәүләтовҡа, Искәндәр Дауытовҡа Советтар Союзы Геройы исемдәре бирелде.

Wikipedia - ирекле энциклопедияһында яҙылыуынса, Таһир Күсимов полкы 1943 йылдың 27 сентябрендә Днепрҙы аша сығып, 2,5 километрлыҡ плацдарм булдыра. Был көндә полк әллә ни ҙур юғалтыуҙар кисермәй, киреһенсә, 77 дошман һалдатын, ике офицерын тар-мар итә, 15 автоматты, 4 ҡул пулеметын, 50-нән артыҡ винтовканы, 3 станок пулеметын ҡулға төшөрә. Һуғыш буйына Таһир Күсимов полкы 19 ауыл-ҡаланы дошмандан азат итә.

Әйткәндәй, һыбайлыларҙың нисек итеп танкыларға ҡаршы барыуы тураһында бик күп риүәйәттәр йөрөй. Үҙ күҙем менән күргән кеше булараҡ, бының бер серен асайым әле. Ҡышты күҙ алдына килтерәйек: ҡалын ҡар яуған, көрт. Пехота өсөн ҡар - бик ҙур уңайһыҙлыҡтар тыуҙырыусы көртә булып тора. Шуға күрә, был осраҡта кавалериянан да уңайлыраҡ нәмә юҡ: көтмәгәндә килеп сығаһың да, ат өҫтөнән дошман танкыһына һикереп менәһең. Шунда уҡ өҫтөндәге шинелде сисәһең дә, тимер аждаһаның амбразураһын, беҙҙеңсә әйткәндә, тәҙрәһен томалайһың. "Күҙһеҙ" ҡалған танкистар уныбыны уйлап тормай, люкты аса башлай. Ә был ваҡытта гранаталар эшкә егелә: асыҡ люк эсенә бер граната ташлап өлгөрһәң, шул еткән...

### Яу хәтирәләренән...

Беҙ, 15-ләп тирәһе генә атлылар, бер мәл 20 саҡрым дошман тылына үтеп инеп, немецтар менән йөҙгә-йөҙ осраштыҡ. Дошмандар ҙа һан яғынан беҙҙең менән бер сама, тик уларҙың ике бронетранспортеры бар. Был һуғышта дошмандар үҙҙәрен бик аяп һуғышҡан һымаҡ тойолдо. Уларҙы, беҙҙең яҡта һалдаттар күберәк, ахыры, тигән уй һәм беҙҙең пулемет утының әүҙемлеге һағайтты шикелле. Әгәр ҙә, тәүәккәлләп, беҙгә ҡаршы бронетранспортерҙарын ебәргән булһалар, һис шикһеҙ, ер менән тигеҙләрҙәр ине. Бәхеткә күрә, беҙ был яуҙан да имен-аман сыға алдыҡ, етмәһә, дошмандың бер төркөм һалдатын әсиргә төшөрҙөк. Махсус рәүештә тегеләрҙең баш өҫтөнән пулялар һыҙғыртып, тегеләрҙе паникаға бирелдерҙек һәм ҡулдарын күтәрергә мәжбүр иттек.

Германияның үҙендә Бранденбург янындағы "Тигр" исемле танкылар етештереүсе заводты ла яулап алдыҡ. Барып инһәк, әллә күпме танк ултыра, ә береһе лә атмай. Яғыулыҡтары булмаған икән. Тағы ла, тотҡонлоҡҡа эләккән немец һәм француз коммунистарын концлагерҙан ҡотҡарҙыҡ.

### Әгәр ҙә һуғыш булмаһа, ни булыр ине?

Бик ҡыҙыҡ һорау. Бер ҡараһаң, был һорауға яуап әҙер: ҡорбандар булмаҫ ине. Икенсенән, әгәр ҙә һуғыш булмаһа, беҙҙең илдә эскелек бик үк сәскә атмаған булыр ине. Һуғышҡа тиклем ауылдарҙа эскән кешеләр бөтөнләй булманы тиерлек. Ололар һүҙе барыһы өсөн дә закон ине бит. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуғыш бик күптәрҙең ғүмерен өҙҙө, шулай уҡ эскелек тигән алама ғәҙәткә өйрәтте.

### Шайморатовтың исеме телдән төшмәне

Уның тураһында яуҙаштарҙан бик күп хәтирәләр ишетергә тура килде. Ике академия тамамлаған уҡымышлы, шул уҡ ваҡытта һөйкөмлө, кеше йәнле кеше булған, тинеләр уның тураһында. Сталинград яуынан имен сыға алған булһа, уны корпус командиры итеп алырға тейеш булғандар. Кемгәлер генералды иҫән ҡалдырмау уңайлыраҡ та булғандыр. Украина халҡы - Бандераға, Рәсәйҙә Власовҡа Герой исеме бирергә тырышалар. Ә Миңлеғәле Шайморатовҡа - ниңә бирмәҫкә? Ошо һорау һаман борсой мине. Ул һуғышта булған, алышҡан, ҡан ҡойған, ғүмерен фиҙа ҡылған. Етмәһә,ниндәй көслө ғәскәр тәрбиәләй алған шәхес ҡасан үҙ баһаһын алыр?

### Әсирлеккә эләккәнсе...

Һуғышта әсирлеккә эләгеүселәр ҙә булды. Ә башҡорт егеттәре араһында пленға эләгеүселәр бөтөнләй булманы. Үлемде артығыраҡ күрҙе улар. Бер хәл булды: ҡамауға эләктек, атышабыҙ. Мин пулеметтан дерелдәтәм дошмандарҙы. Минең эргәләге бер иптәш, түҙмәй, бирелергә тәҡдим итте:

-Ҡамауҙа ҡалдыҡ бит, шулай ҡулайыраҡ булыр, - ти.

Мин шунда уҡ ҡырт киҫтем:

-Юҡ, минә пулемет һынлы пулеметты ышанып тапшырғандар, бирелмәйәсәкмен. Әгәр ҙә әсиргә алырға теләһәләр, минең, пулемет төҙәүсеһе булараҡ, пистолетым бар, үлһәм үләм, әммә терелә́й бирелмәйәсәкмен. Әгәр мин үлеп, һин тере ҡалһаң, һеҙҙең улығыҙ шул ерҙә башын һалды, тип, минең атай-әсәйгә еткерерһең, - тинем дә, ул иптәшкә ике таҫма патрон тоттороҙом. Шунан:

- Әйҙә, ат! Башты ҡаңғыртма, - тинем.

Аллаға шөкөр, ҡамауҙы йырып сыҡтыҡ. Ни өсөн башҡорт егеттәре әсирлеккә төшмәй? Сөнки халҡыбыҙ бер ваҡытта ла ҡоллоҡта йәшәмәгән - азатлыҡты иң ҙур байлығы һанаған.

### Ә бөгөн?

Бөгөн һәр кем Бөйөк Ватан һуғышы тураһында үҙенсә хәбәр һөйләй. Булмаған хәлдәрҙе лә "булды", тиеүселәр осрай. Америкалылар был һуғышта үҙҙәрен генә еңеүсе тип иҫәпләй. Кемдер Рәсәйҙе Германияға беренсе булып яу асҡан, тигән ялған хәбәр тарата. Дөрөҫ түгел бит быларҙың береһе лә. Беҙ, ул йылдарҙың тере шаһиттары, үҙ һүҙебеҙҙе әйтергә тырышабыҙ. Киләсәк быуын ошо һуғыштағы башҡорт батырҙарының да ҡаһарманлыҡтарын белеп үҫһен ине.

Бөгөн донъяның төрлө урындарында яу усаҡтары ҡабынып тороуы борсоуға һала. Дипломатик юл менән хәл итергә кәрәк мәсьәләләрҙе. Һуғыш бәхет килтермәй. Һуғыш ҡырҡыу мәсьәләне сисергә ярҙам итмәй. Ул халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙе ҡатмарлаштыра ғына.

Һәр кемдең был донъяла оҙағыраҡ йәшәп ҡалғыһы килә. Ҡартайған булһам да, мин дә көн һайын Алланан: "Бер көн булһа ла һаулыҡ бир инде", - тип теләйем.

Киләсәкте күҙаллап ҡараһам, беҙҙең ил түрәләре алып барған тышҡы сәйәсәт дөрөҫ йүнәлештә алып барылғандай тойола. Матур һөҙөмтәләрен бирһен инде был сәйәсәт, уландарыбыҙ ҡабат ҡулына ҡорал алмаһын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғәйфулла олатай Ғәбитовтың һүҙҙәрен ҡеүәтләп, үҙенә һаулыҡ, күңел тыныслығы теләге килә. Олатай бөгөн дә һуғыш картиналарын төштәрендә күреп ғазаплана икән. Был ғәрәсәт тамамланыуға алты тиҫтә йылдан ашыу ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, әле һаман күңел тетрәнеүҙәре кисереп йәшәргә мәжбүр ителгән ҡарт һалдат күргәндәрҙе беребеҙгә лә күрергә яҙмаһын ине.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Ризығың файҙалымы?

Ысынлап та, ризыҡты туйымлыҡ өсөн, танһығыңды ҡандырыу өсөн түгел, ә уның организмыңа файҙалы булыу-булмауын белеп ашарға кәрәк.

❖ Йөрәк һәм бауыр ауырыуы ваҡытында көн һайын 100-әр грамм эремсек ашау файҙалы.

❖ Ҡалҡан биҙе шешкән ваҡытта лимонды ҡабығы менән бергә ит турағыстан үткәреп, шәкәр ҡомо ҡушырға һәм шуны көнөнә 3 тапҡыр берәр балғалаҡлап ашарға.

❖ Ҡан ауырыуы булһа, йыл буйына петрушка ашау файҙалы. Петрушка ҡандың ойоу һәләтен яҡшырта, организмдан артыҡ шыйыҡлыҡты ҡыуып сығара.

❖ Боғаҡ (зоб) һәм атеросклероз интектерһә, 1 кг ҡара миләште 1 кг шәкәр ҡомона ҡушып болғатырға һәм шуны көнөнә 3 мәртәбә берәр балғалаҡ ашарға.

❖ Бауырҙа таш булғанда ер еләге өлгөргән ваҡытта көнөнә 6 тапҡыр яртышар стакан еләк ашарға кәрәк. Ер еләге экземанан, ҡурылдайҙан да дауалай.

❖ Миокард инфаркты булғанда, яңы һығылған кишер һуты эсергә кәрәк.

❖ Ҡан таҙартыу, бауыр өҫтөн ҡаплаған лайланы бөтөрөү өсөн йылына бер-ике тапҡыр ҡабыҡлы көйө һоло бешереп, һөҙөп эсергә, һоло бутҡаһын йышыраҡ ашарға кәрәк.

❖ Көсөргәнешлекте, йән көйөүен, кәйеф ҡырылыуын бөтөрөү, йән тыныслығын һаҡлау өсөн кәбәктән (отрубь) бешерелгән икмәкте йышыраҡ ашарға кәрәк. Арығанлыҡты, хәлһеҙлекте, төшөнкөлөк һәм йоҡомһорап йөрөүҙе ҡәҙимге таҙа һыу бөтөрә. Оло кеше көнөнә 6-8 стакан таҙа һыу эсергә тейеш. Башҡа төрлө эсемлектәр иҫәпләнмәй.

### Ҡурылдай

Һарыһыу мәлендә ҡурылдай сире (бронхит) көсәйеүсән була. Унан һаҡланыу өсөн: һуған ашарға һәм уның шәкәрле һутын эсергә; түш, арҡаны иҙелгән һуған ҡушылған һарыҡ майы (эс майы яҡшыраҡ) менән ышҡырға; бер тамсы спирт йәки камфара тамыҙып, йылы һөт, кишер һуты эсергә; йүткерһә, көнөнә өс мәртәбә 2-3 сей хөрмә емеше ашарға, ә төнгә 1 ҡалаҡ көнбағыш майы ҡушып, эҫе сәй эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Шулай мылтыҡтан ата-ата йүгереп барғанда атайҙың артынан килгән урыҫ иптәше: "Зәйнулла, һинең ҡулың юҡ!" - тип ҡысҡырып ебәрә. Атайым һул ҡулын күтәреп ебәрһә, ысынлап та, уны снаряд өҙөп алған.*



*ХӘТЕРКИТАП*

# ҠӘҺӘР ТӨШКӘН ҺУҒЫШ ҠАСАФАТТАРЫ



## ИҢ АУЫРЫ - ЙӘН ЯРАҺЫ

**Һуғыш тигән һүҙҙе ишетеү менән тәндәр эҫелеһыуыҡлы булып китә. Ә һуғышта ҡатнашҡан кешеләрҙең ни кисереүен бары тойомларға ғына ҡала. Ундайҙар өсөн был һүҙҙе ҡабаттан ишетеү бигерәк ауыр икәнлеген, атайым һуғыш ветераны булғанға күрә, яҡшы беләм. Ут эсендә үлем тигән нәмәнең һәр ваҡыт һағалап тороуы, үҙ балаларыңдың етем ҡалып ҡуйыу ҡурҡынысын аңлау ниндәй генә уйҙарға һалмағандыр һалдатты...**

СССР халҡы өсөн йыш ҡабатланған һуғыштар араһында Бөйөк Ватан һуғышы - иң аяуһыҙы, иң ҡурҡынысы һәм иң ҡатыһы булды. Һуғыштың үҙендә лә, хатта тылда ла кешеләрҙең һанһыҙ ҡырылыуы был һуғышты башҡаларынан айырып торҙо. Һуғышта илебеҙ халҡының яҡынса 20 миллиондан ашыу халҡы ҡырылһа, концлагерҙарҙа, Сталин лагерҙарында 10 миллионға яҡын кеше һәләк булды. Һуғышта һәм тылда үлгән балаларҙың иҫәбе лә, һаны ла юҡ. Ә күпме сабый был донъяға килә алманы... Күпме сабый бала сағын юғалтып, өлкәндәр кеүек эшкә егелде. Хатта ҡайһы берәүҙәр һуғыштарҙа ла ҡатнашты. Был турала уйлау ғына түгел, иҫкә төшөрөү менән үк тәндәр эҫеле-һыуыҡлы булып китә.

Күҙ алдына килтереүе лә аяныс, сөнки кемдер ғәрипләнеп булһа ла әйләнеп ҡайта алыуына ҡыуанды. Был да ҙур трагедия бит. Һау көйө балалар үҫтереү урынына ғәриплеккә ҡыуансы әле! Был тәбиғи күренеш түгел, был ҡалыптарға һыймай торған зәғиф ҡыуаныс. Зәғифләнеп ҡайтҡан һалдаттар үҙҙәрен бәхетлеләргә тиңләп, хеҙмәт фронтында эш башланы. Минең атайым Зәйнулла Бикбирҙин да, алты ай һуғышта ҡатнашҡандан һуң, һул ҡулһыҙ ҡайтып төшә. Тупыс ҡулының өҙөлгән урыны 6 йыл буйына уңалмай ыҙалатты уны. Хәтеремдә, көн дә иртәнсәк дарыу-май һөртөп, сепрәк урай, ике ҡат цилиндр формаһындағы бейәләй кейә, шунан һуң ғына эшенә китә торғайны атай. Яуым-төшөм башланһа, ҡаты һыҙлана. Беҙ, бәләкәстәр, уның янына килеп, сирылып-сирылып, уны йәлләй торғайныҡ. Атайыбыҙ ныҡ булды, түҙҙе. Иллә мәгәр, һуғыштағы иң асыуына тейгән бер ваҡиғаны әсенеп һөйләр ине.

Атайымдарҙың полкы атакаға ташлана. Фашистар барлыҡ ҡоралдарынан ут яуҙыра. Шулай мылтыҡтан ата-ата йүгереп барғанда атайҙың артынан килгән урыҫ иптәше: "Зәйнулла, һинең ҡулың юҡ!" - тип ҡысҡырып ебәрә. Атайым һул ҡулын күтәреп ебәрһә, ысынлап та, уны снаряд өҙөп алған. Ул шунда ғына түҙә алмаҫлыҡ ауыртыныу һиҙә һәм ултыра төшә. Иптәше яралының гимнастеркаһын күтәреп, эсендәге аҡ күлдәгенең итәген йыртып ала, гимнастеркаһын сисмәйенсә, терһәк өҫтөнән быуып бәйләй. Яранан сорлап аҡҡан ҡан туҡтағандай була, шулай ҙа тамсылап ҡына ағыуын дауам итә. Атайымдың башы әйләнә башлай, ул үҙенең хәле бөтөүен тоя. Яраһын бәйләгән иптәше: "Һин ошонда ултырып тор, хәҙер санитарҙар килеп етер, ә мин атакаға киттем", - ти ҙә, хушлашып, китеп юғала. Атайымды палатка эсенә урынлаштыралар һәм шунда тәүге медицина ярҙамы күрһәтәләр. Яралы һалдаттарҙы машиналарға тейәп, тылдағы ҡалаларға дауаларға оҙаталар. Бер мәл яраһы һулҡылдауға йоҡлай алмай хәлһеҙ ятҡан саҡта палатаға 12 йәштәр тирәһендәге етем малай - "полк улы" килеп инә лә, ишек янындараҡ ятҡан ҡаҙаҡ һалдатына: "Эй, "самурай", һин бит үҙеңде-үҙең атҡанһың, НКВД чекистары атасаҡ һине", - ти ҙә, дүртенсе койкала ятҡан атайыма килеп: "Самурай, һин дә ҡулыңа үҙең атҡанһың, донъя менән хушлаша тор!" - тип, янай. Атайым ятҡан еренән тороп, теге малайҙы елкәһенән тотоп сығарып ебәрә. Бер-ике сәғәттән НКВД офицеры килеп инә. Ул табиптарҙан ҡаҙаҡ егете һәм атайым менән һөйләштереүҙәрен талап итә. Табиптар икеһененең дә яраһы мылтыҡ пуляһынан түгел, ә снаряд ярсығынан булыуын, шул иҫәптән ҡаҙаҡ егетенең аяҡ төбөндәге һум итен дә снаряд ярсығы умырып алыуын дәлилләй. Шул ваҡыт атайым: "Атакаға ташланғанда минең артымдан йүгереп килгән Фәлән Фәләнов исемле һалдат барыһын да күрҙе, ышанмаһағыҙ, унан һорағыҙ", - тип, дәлил килтерә. Быларҙы ишеткәс, офицер сығып китә, ике һалдат иркен тын алғандай була...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Берияға буйһонған ЧК-сылар һуғыш яланында ла үҙҙәренең ҡара эшен дауам итә ул саҡта. Ә теге "полк улы", бәлки, аңһыҙ рәүештә ололарҙы ҡабатлап ҡына йөрөгәндер. Ниндәйҙер баланың һүҙҙәренә ышанып, унан шикләнеүҙәре атайымдың йәнен яралаған булғандыр. Тәнендәге яраһын онотһа ла, ана шул йән яраһын атайым ғүмер буйы онота алманы...**

**Самат БИКБИРҘИН.**
**Баймаҡ районы.**

## МЕҢ ХӨРМӘТЛЕ ВЕТЕРАНДАР

**Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға 67 йыл да үтеп киткән. Йыл һайын 9 майҙа ла, 22 июнь көндө лә ошо дәһшәтле ваҡиғаны, һуғыш ҡорбандарын иҫкә алабыҙ. Был һуғыш үҙен тағы ла 70 йыл һиҙҙерер әле...**

Ошо һуғыш арҡаһында мин олатайҙарһыҙ үҫтем. Әсәйемдең атаһы Бирғәле олатай, һаулығы насар булыу сәбәпле, тылда ҡалдырылып, көнөтөнө ауыр эштә эшләп, 60 йәшендә генә вафат булған. Атайымдың атаһы Заһит олатайым һуғыш яланында батырҙарса һәләк булған. Һуғыш утын уның менән бергә кискән Йосоп олатай һуғыштан имен-һау ҡайтып, өләсәйемә иренең нисек һәләк булыуы тураһында ошоларҙы һөйләп киткән: "Заһит ҡорҙаш менән бергә тәкбир әйтә-әйтә атакаға күтәрелгәйнек, дошман снайперы уны минең күҙ алдында атып йыҡты. Шул ҡолауҙан Заһит торманы..."

Олатайымдың ағаһы Әйүпкә был һуғыштан имен әйләнеп ҡайтып, оҙон ғүмер кисерергә насип булды. Уның тураһында айырым бер китап яҙырға мөмкин булыр ине. Ул бер генә түгел, өс һуғыш кисергән кеше: Беренсе Бөтә донъя, Граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғыштары... Әйүп олатайымдың Бөйөк Ватан һуғышы тураһындағы бер иҫтәлеге хәтерҙә ҡалған.

Төнөн була был хәл. Атакаға күтәрелергә әмер бирелә. Ләкин немец фашистары һиҙеп ҡалып, бик көслө ут аса. Тирә-яҡ көндөҙгө һымаҡ яҡты тора, баш күтәрерлек тә әмәл юҡ. Шул саҡ беҙҙең бер йәш һалдат, түҙмәй, артҡа йүгерә. "Беҙ уға ҡысҡырып та ҡараныҡ, берәүебеҙ уны туҡтатырға уйлап, ҡаршы ла сыҡҡайны, ләкин һалдат ҡаршы сығыусыны йыға төртөп, ары йүгерҙе. Быны күреп, немецтар ҙа атмаҫ булды, уларҙың психологик тактикаһы булды, күрәһең. Баяғы һалдат беҙҙең заградотряд ятҡан ергә барып та етте, автоматтан тәгәрәтә атып та ҡуйҙылар. Һуғышҡа ла инеп өлгөрмәне, бахыр..." Был һүҙҙәрҙе өс һуғыш үткән, бик ҙур тәжрибә тупланған, шуның өсөн дә бөтә һуғыштарҙан да имен-һау ҡотолған ҡарт һалдат һөйләне. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул мәлдә мин йәш, үҫмер генә бала инем. Әйүп олатайҙы күберәк тыңларға, һөйләгәндәрен ҡағыҙға теркәргә кәрәк булған да бит, күпме хәтирәләр уның үҙе менән ҡәбергә китте...

Ауылдаш ҡына түгел, бер урамда йәшәгән Хөрмәт Мөхтәр улы Амангилдин тураһында ла һөйләп үтергә кәрәктер. Уны мин Мостай Кәримдең Үлмәҫбайы менән бер рәткә ҡуйыр инем. Хатта алғараҡ та. Сөнки Үлмәҫбай - бары тик поэма геройы, ә Хөрмәт Мөхтәр улы - һуғыштың тере ҡаһарманы, шаһиты. Ул күберәген һуғышта булған ҡыҙыҡ хәлдәрҙе һөйләй торғайны. Шул хәтирәләрҙең береһе: "Һуғыш тымып торған бер мәл, йәшенле ямғыр яуа. Элемтәселәр будкаға инеп йәшеренгән. Шул саҡ будканы йәшен ата һәм бер һалдатҡа тейә. Йәшендән атылған һалдат иҫһеҙ ҡолай. Командир: "Тиҙ генә тышҡа алып сығып, башын ғына ҡалдырып, ергә күмегеҙ!" - тип бойора. Кем был ямғыр ваҡытында уны күмеп, мәшәҡәтләнеп йөрөһөн инде, сығарып, күләүеккә ташланыҡ та, кире индек. Ярты сәғәттән теге һалдат килеп инмәһенме! Үҙе дер ҡалтырай, "Ниңә мине һыуға сығарып ташланығыҙ?" тип, беҙгә үпкәләгәндәй итә..."

Хөрмәт олатай һөйләгән икенсе хәл тағы ла фажиғәлерәк, шул уҡ ваҡытта фәһемле лә: "Көн һайын атакаға күтәреләбеҙ, әммә һөжүм бик ауыр бара - көнөнә өс-биш километрлап ҡына алға шыуышабыҙ. Аҙна тирәһе шулай шыуыштыҡ. Бына бер мәл немецтар, ҙур көс туплап, контратакаға күтәрелде. Бер аҙна шыуышып яулаған еребеҙҙе 2 сәғәт эсендә ҡалдырып киттек. Паника шул тиклем көслө булды, сөнки немецтар бер кемде лә әсиргә алмай ине. Тик йәш, һәйбәт йүгергән һалдаттар ғына ҡотола алды, ә олораҡтар бөтәһе лә немец танкыһы аҫтында ятып ҡалды... Беҙҙең бәхеткә, бер

***✓ Ҡайҙа ҡарама - өҙөлгән ҡулдар, аяҡтар, баштар. Йөрәктәр әрней, шундай көслө нәфрәт менән тотонабыҙ дошман кәүҙәләренә, уларҙы шундай уҡ нәфрәт менән соҡорҙарға ырғытабыҙ.***

ЗИС-5 машинаһы килеп сыҡты. Ултыртмай ҡасып маташһа ла, ҡыуып етеп, арбаһына алты һалдат ырғып менеп ултырҙыҡ. Йәш инек шул, йәшәге лә килгәндер. Тик бер олораҡ һалдатыбыҙ машинаға менә алмай ҙа ҡуя, берәүҙең дә төшөп, уға ярҙам итергә батырсылығы етмәй, һәр беребеҙ үҙебеҙ өсөн ҡурҡабыҙ. Мин түҙмәнем, ырғып төштөм дә, теге һалдатҡа ярҙам иттем, ә ул миңә ярҙам итергә ҡулын һуҙҙы. Ошо хәлдән һуң был һалдат минең ышанысл дуҫыма әүерелде. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер-нисә айҙан һуң ул һәләк булды", - быларҙы һөйләгәндә Хөрмәт олатайҙың йөҙө бик уйсанланып китә ине...

Тағы бер һуғыш ветераны Солтанәхмәт олатай тураһында яҙып үтмәксемен. Уның һуғыш юлы мажараларға бигерәк тә бай. Тәүҙә ул, һуғышып йөрөп, әсирлеккә эләгә. Күп тә үтмәй, унан уңышлы ҡасып, партизандарға барып юлыға. Бик күп рейдтарҙа ҡатнашыу, разведкаларға йөрөү, немецтарға хеҙмәт иткән һатлыҡ йәндәрҙе тотоп алып килеп, партизандар хөкөмөнә тапшырыу уның көндәлек эшенә әүерелә. Солтанәхмәт олатай һуғышты Берлинда ҡаршылап, тыуған яғына немец ҡыҙын эйәртеп ҡайтып төшә. Ҡатыны менән ике ул үҫтерҙеләр. Үҙе йыр-моңға әүәҫ кеше булды, скрипкала ла, ҡурайҙа ла бик матур уйнай торғайны. Үҙе бик ҙур оптимист кеше ине. Вафатынан ярты йыл самаһы алдараҡ беҙҙең өйгә арҡаһына рюкзак артмаҡлап килеп керҙе. "Олатай, тоҡсайыңдың эсендә нимә ята ул?" - тигәс, көлдө лә: "Арҡам көмөрәйә башланы, шуға бына ике кирбес һалып йөрөтәм", - тип, ике кирбесен сығарып күрһәтте. Һикһәнде үткән кешенең йөк күтәреп йөрөүенә беҙ хайран ҡалдыҡ. Ысын мәғәнәһендә - ҡарт гвардия!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тыныс тормошта күрәләтә кирбес күтәреп йөрөүе был быуын кешеләренең үҙҙәренә һалынған яуаплылыҡтан сыныға, ахыр сиктә, был йөктән арына ла алмаҫлыҡ хәлгә етешеүенә ишараламаймы ни? Беҙ әле хәтирәләрен бәйән иткән, үлемесле һуғыш юлдарын үткән һалдаттар барыһы ла вафат инде. Улар тураһында күпме яҙһаң да, аҙ һымаҡ, сөнки уларһыҙ беҙҙең тормош тыныс булмаҫ ине. Вафат булған ветерандарыбыҙҙы йышыраҡ иҫкә алайыҡ, улар быға лайыҡ бит. Һеҙҙең алда баш эйәбеҙ, мең хөрмәтле ветерандар.**

**Әхәт ИШБУЛАТОВ.**
**Баймаҡ районы.**

# СТАЛИНГРАД ТАМУҒЫ



**Сталинград ҡалаһы өсөн барған алыш - Бөйөк Ватан һуғышында иң ҡанлы биттәрҙең береһе була. Дәһшәтле яу 1942 йылдың 17 июленән 1943 йылдың 2 февраленә тиклем дауам итә. Бында дошмандың 300 меңлек еңелмәҫ тип һаналған армияһы тар-мар ителә. Ошо тарихи еңеүҙән һуң Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙарын да Сталинград емереклектәрен таҙартырға ебәрә башлайҙар. Беҙҙең Ишембай районынан да байтаҡ ҡатын-ҡыҙҙы алып китәләр Сталинградҡа. Уларҙың бер нисәһе менән аралашып йәшәргә, ошо ҡот осҡос йылдарҙың хәтирәләрен тыңларға тура килде миңә. Гәзит уҡыусыларға шулар тураһында һөйләйем әле, тинем.**

-Иң тәүҙә беҙҙе Петровск военкоматына саҡыртып, ҡайҙа китергә тейешлегебеҙҙе аңлаттылар ҙа, тимер юл вокзалына алып барып, поезға ултырттылар. Башҡортостандан 300-ләп ҡатын-ҡыҙ инек, - тип һөйләгәйне Хәсбиямал апай. - Беҙ - Хажы ауылынан Йәмилә, Көҙәндән Сабира һәм Арларҙан мин тәүҙән үк бер-беребеҙҙе һаҡлап, ҡарап йөрөргә һүҙ ҡуйыштыҡ. Арабыҙҙа Йәмилә - иң йәше, 16 ғына йәш, Сабираға - 20 йәш, миңә - 22.

Бына Сталинградҡа килеп етеүебеҙҙе хәбәр иттеләр. Вагондарҙан төшөү менән ҡот осҡос күренешкә тап булдыҡ. Тирә-яҡ емереклек менән ҡапланған, тегендә-бында торбалар ғына һерәйеп ултыра. Һарыҡ көтөүе кеүек өйөлөшкәнбеҙ ҙә, ҡурҡышып, аптырашып торабыҙ. Шул тиклем асыҡҡанбыҙ, эсергә һыу ҙа юҡ. Баҡтиһәң, немецтарға ҡалдырмаҫ өсөн иң мөһим объекттарҙы үҙебеҙҙекеләр үк шартлатҡан булған икән. Ошо иҫ китмәле емереклектәрҙе, ҡап-ҡара ҡоромға әйләнгән ҡаланы күргәс, үҙебеҙҙе ысын тамуҡҡа килеп кергәндәй тойҙоҡ.

Беҙҙең эргәгә йөк машинаһы килеп туҡтағас, ҡурҡышып, бер-беребеҙгә һыйындыҡ. Баҡһаң, ялан кухняһы икән. Землянкаларға урынлаштырҙылар, һалам тултырылған түшәк таратып бирҙеләр. Ашарға йүнле ризыҡ юҡ. 300 г кукуруз икмәге бирәләр, һыҡһаң, һыуы сығырлыҡ. Һыуҙы ҡайҙандыр ташып эсерәләр. Иң тәүҙә беҙгә снаряд, граната ярсыҡтарын соҡорҙарға ташырға ҡуштылар. Арабыҙҙа минаға баҫып шартлаған ҡыҙҙар күп булды. Әхмәр ауылынан Бикә исемле ҡыҙҙы илай-илай ерләнек. Бер айҙан нимес һалдаттарының һөйәктәрен йыйырға ҡуштылар. Волга өҫтө меңәрләгән һалдат кәүҙәләре менән тулған, ышанмаҫлыҡ хәл. Ҡайҙа ҡарама - өҙөлгән ҡулдар, аяҡтар, баштар. Бына итек ята, ә эсендә нимес һалдатының өҙөлгән аяғы. Йөрәктәр әрней, шундай көслө нәфрәт менән тотонабыҙ дошман кәүҙәләренә, уларҙы шундай уҡ нәфрәт менән соҡорҙарға ырғытабыҙ.

Беҙ өс ҡыҙ һәр саҡ бергәбеҙ. Мин иң олоһо булғас, яҡташтарым миңә һыйына. Йәмиләбеҙ, Хажы тауҙарын, еләктәремде һағындым, һарғайып үләм бит инде, ҡасан ғына был этлектәрҙән ҡотолорбоҙ, тип илай башлаһа, уны йыуатабыҙ. Ҡайһы бер ҡыҙҙар эргәнән үткән поездарға эләгеп, ҡасырға маташтылар, ләкин барыбер тотолалар ине. Шуға күрә беҙ ҡасып ҡайтырға уйламаныҡ та. Йәй еткәс, тиф ауырыуы башланды. Сәстәрҙе япыланғас итеп ҡырҙылар. Йәмиләнең оҙон сәстәрен ҡырып ташлағас, ул тағы ла һыҡтап-һыҡтап иланы. Концлагерь тотҡондарына оҡшап ҡалдыҡ: баштарыбыҙ таҡыр, үҙебеҙ ябыҡ, ҡоро һөйәк. Тиф ауырыуынан кешеләр үлә башланы. Иҫән-һау тыуған ергә ҡайтһаҡ, кәкүк емештәрен, балан-муйылдарыбыҙҙы ашап, көс йыйыр инек, тип хыялланабыҙ. Иртәнсәк йоҡонан торғас, бер-беребеҙҙе ҡапшап ҡарайбыҙ, Аллаға шөкөр, теребеҙ икән тип һөйөнәбеҙ. Астан үлмәҫ өсөн, өсөнсө сменаға төндә бәрәңге әрсергә китәм. Бәрәңге ҡабыҡтарын алып килеп, ҡыҙҙар менән шуны өтөп ашайбыҙ. Көндөҙ эштә йөрөгәндә ашарға тигән нәфсебеҙҙе баҫыу өсөн тоҙ ялайбыҙ. Тоҙ ялағас, һыу эсәбеҙ, ашҡаҙан ашарға һорамай.

Бер завод эргәһендә емереклектәрҙе таҙартҡанда подвалға тап булдыҡ. Баҡһаң беҙҙекеләр бомбаға тотҡанда завод торбаһы ауып, подвалдың сыға торған ишеген ҡаплаған, ә эсендә немец һалдаттары йәшеренгән булған. Көнө буйы уларҙың үле кәүҙәләрен соҡорға ташырға тура килде.

Иң йәш Йәмиләбеҙ ҙә Сталинград тамуғында шулай сыныҡты, илауҙан туҡтаны. Бөтөн ауырлыҡтарҙы еңеп, иҫән-һау ғына йөрөп ятабыҙ. Совет һалдаттарының Берлинға барып етеүен ишетеү беҙгә дәрт өҫтәй. Тыуған яҡтарға иҫән-һау ҡайтып буласағына өмөт уянды...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Еңеү яҙында Сабира менән Йәмилә тыуған ауылдарына иҫән-һау ҡайтып етә. Сабира апай Һайран егетенә тормошҡа сығып, ғүмерен балалар уҡытыуға арнай, әле лә иҫән-һау донъя көтә. Йәмилә апай Этҡол егетенә кейәүгә сығып, 6 бала үҫтерә. Әле лә иҫән-һау, 84 йәштә. Сталинград тамуғынан һуң Хоҙай Тәғәлә уларҙан ожмахты йәлләмәй, өләсәйҙәр булып, донъя матурлығына һоҡланып йәшәүҙәрен дауам итәләр.**

**Ә Хәсбиямал апайыбыҙ Сталинградта Захар исемле урыҫ егете менән ғаилә ҡора, 3 балалы булғас, 1964 йылда ғаиләһе менән тыуған яҡтарға ҡайтып, "Ағиҙел" совхозында төпләнә. Бөгөнгө көндә 12 ейән-ейәнсәре, 4 бүлә-бүләсәһе бар. "Тамуҡты күрҙек, ә хәҙер ожмахта йәшәйем. Тик Еңеү яҙҙары еткән һайын немец һалдаттарының кәүҙәләре, итек эсендә өҙөлөп ҡалған аяҡтар, өҙөлгән баштар иҫкә төшә, тифтән үлеп ҡалған ҡыҙҙарыбыҙ күҙ алдынан китмәй..." - тип хәтирәләргә бирелер ине һәр саҡ. Хәсбиямал апай яҡты донъяларҙа юҡ инде.**

**Вараҡа ҒӘЛӘҮЕТДИНОВА.**
**Ишембай районы**
**Яңы Әптек ауылы.**

# ҺУҒЫШТЫ ҠУРАЛМАЙЫМ...



**Һүҙем әсәйебеҙҙән бәләкәй генә көйө ҡалған беҙҙе, өс етемде, ҡарап үҫтергән һөйөклө Камила өләсәйебеҙ тураһында.**

... 22 июнь, 1941 йыл. Матур, аяҙ көн. Һыбайлы егет һөрән һалып кешеләрҙе мәктәп янына саҡыра: "Һуғыш сыҡҡан!" Олоһо, кесеһе, аяғына баҫҡаны мәктәп эргәһенә ағыла. Өйҙән сығып, мәктәбебеҙ эргәһенә йүгерҙем. Райондан килгән кеше һөйләп тора. Илаш-ыҙғыш башланды. Һамаҡлай-һамаҡлай өләсәйебеҙ илай: "Был ярман һуғышып туйманы. 6 улымдың бөтәһен дә һуғыш йотто. Абдрахманым японда ҡалды, Вәлиуллам ярманда..." Был һуғыштың оҙаҡҡа һуҙылырын, беҙҙең өсөн фажиғәле көндәр килеүен, үҙенең дә күп ғүмере ҡалмағанын һиҙенеп иланы ул.

Беҙ инде өс бала һәм өләсәй - күптән инде ҡараусыһыҙ ҡалған етемдәр. Атай - 37-се йыл ҡорбаны, әсәй 25 йәшендә ҡапыл үлеп киткән. Беҙҙе Камила өләсәйебеҙ тыуғандан алып ҡарап үҫтерҙе. Ҡустым менән һуғыш башланғандан алда уҡ әле колхоз эшенә егелдек. Мәктәптә уҡыуҙар бөткәс тә, утауға алып китәләр. Балалар менән Ярулла ағай етәкселек итә. Йоҡлаған урындарыбыҙ ҡыуышта. Шулай 1943 йыл етте. Мине фермаға хисапсы итеп билдәләне колхоз. Ә урындағы хәлдәр - әҙәм ышанмаҫлыҡ. Һыйырҙар ҡаҡ туң ерҙә ята, ашарҙарына бер нәмә лә юҡ. Мин таң менән тороп, һауынсыларҙың һауған һөттәрен үлсәп алам. Һыйырҙарҙың аҫтын таҙартышам. Апайҙар һыйырҙар быҙаулағандан һуң ҡалған сыуалдарын өйҙәге балаларына бешереп ашатыр өсөн бүлешеп алып ҡайталар. Ҡаҡ ерҙә ятҡан, ашамаған һыйырҙарҙан ниндәй һөт булһын инде? Мин һыйырҙарҙы ла, һауынсыларҙы ла йәлләп илайым. Мин эшләй башлағандың икенсе аҙнаһына һыйырҙарҙы Орсоҡ тигән ауылға күсерҙеләр. Унда ла ферма бар ине. Мин ҡотолдом, тип ҡыуандым. Колхозда башҡа эштәр ҙә етерлек: ырҙында иген таҙартыу, ҡар тотоу һ.б. Үткән йылдың яҙында атайымдың ҡарындашы Ғәзизә апайыбыҙҙың ярҙамы менән баҡсабыҙҙы тултырып картуф сәскәйнек. Ул ныҡ унды. Бер ҙә асыҡмай, ҡышты сығып килгәндә, ауылдағы туғыҙ етем баланы балалар йортона ебәрергә булдылар. Беҙ ҡайғыға ҡалдыҡ. Беҙ китһәк, өләсәйебеҙ ни эшләр, уны кем ҡарар? Уға 85 йәш. Ул бик бөтөрөндө. Ингән бер кешегә төшөн һөйләй: "Һыҙламай-нитмәй генә өс ап-аҡ тешем төштө, ҡалай осор күргәнмен (осор - дөрөҫ тигән һүҙ)". Ул ваҡытта төш юрау тигән нәмәне ҡайҙан беләһең.

Китер көн етте. Өләсәйебеҙ ни үле, ни тере түгел - һәндерә башында ултыра. Һөйләшә лә алмай, өй ишеге ябылмай, кешеләр инеп-сығып тора. Өләсәй ҙур ғына бер төйөнсөк, өр-яңы калош һуҙа, ал, тип ымлай. Алманым. Алмағаныма үкенәм хәҙер. Уның үҙ ҡулдары менән теккән боронғо ҡатаһы, еләне, ике ситеге, ураулыҡҡа һалынған нәмәләре, миңә тигән өр-яңы боронғо күлдәге бар ине. Шулай сығып киттек өйҙән. Ауылыбыҙҙы мәңгегә ташлап сығып киткәндә миңә - 14, ҡустыма - 12, һеңлемә 10 йәш ине. Районның Ташбулат ауылында асылған балалар йортонда ҡустым 4-се, һеңлем 2-се класта уҡый башланы. Мин инде күптән "эш кешеһе": ашханала контролер, ашнаҡсы ярҙамсыһы кеүек эштәрҙә эшләй башланым. Балалар йорто өсөн кейем алышырға барғанда Өфө вокзалында поезд тәгәрмәсенә эләгеп, бер аяғымдан яҙып ҡуйҙым. Миңә 18 йәш ине.

Күп ауырлыҡтар кисереп, ҡатмарлы тормош һуҡмаҡтары үтеп, өсөбөҙ ҙә юғары белемгә эйә булдыҡ. 1943 йылда өләсәйебеҙҙең үлеп ҡалыуы тураһында уҡытыусы апайҙан хат алдыҡ. Фажиғәле үлеме тураһында эшләй башлағас ҡына ишеттем. Туғандарым менән осрашһаҡ, өләсәйебеҙҙе хәтерләп илаша торғайныҡ. Беҙҙе үҙ балаларындай ҡараны, беҙ уны һуңғы көндәрендә ҡарай алманыҡ. Бөтәһенә лә һуғыш ғәйепле. Өләсәйем беҙҙән ҡалғанда зиһене шәп, аңы теүәл, бик аҡыллы кеше ине. Әгәр һуғыш сыҡмаһа, беҙ шулай бергәләп йәшәр ҙә йәшәр инек. Олоғайған һайын бала саҡ хәтирәләре кинокадрҙағы һымаҡ күҙ алдымдан уҙа, шуларҙа өләсәйемдең бер ай эсендә интегеп үлеүе, баш һөйәген ас эттәрҙең урам буйлатып талап йөрөү кадрҙары үтеп тетрәндерә. Оло йөрәкле Камила өләсәйебеҙ өсөбөҙҙөң күңелендә һәйкәл булып урын алды, бер ваҡытта ла онотмаҫҡа, хәйер биреп торорға һүҙ ҡуйышҡайныҡ. Хәҙер ул бурысты үтәү Фәйрүзә ҡыҙым менән минең өҫтә.

Илебеҙ тыныс булһын, һуғыш булмаһын. Шул һуғыш арҡаһында беҙ тыуған өйөбөҙҙән, ауылыбыҙҙан яҙҙыҡ, хатта барып йөрөр нигеҙебеҙ ҙә юҡ. Уҡыған ваҡытта ҡайтып йөрөр кешебеҙ ҙә булманы. Мин һуғышты күралмайым. Ябай халыҡҡа һуғыш кәрәкмәй, ул сәйәсмәндәр, власть башында ултырғандарҙың эше.

**Нәғимә ИЛҺАМОВА.**
**Әбйәлил районы Асҡар ауылы.**

*✓ Иң аҙаҡтан "Тамашасы һөйөүе призы" Башҡортостандан "Ҡурайсы" командаһына тапшырыла", тип иғлан иттеләр. Ысынында, был беренсе урынға һәм еңеүсе исемен алыуға тиң булды.*

**Билдәле ҡурайсыбыҙ Роберт Юлдашев күптән түгел йәнә бер халыҡ-ара конкурста - Санкт-Петербургта үткән "Терем Кроссовер" музыканттар турнирында ҡатнашып, еңеү яулап ҡайтты. Роберт Юлдашев иң абруйлы номинацияға - "Тамашасылар һөйөүе" призына эйә булды. "Терем Кроссовер" - музыка донъяһында иң дәрәжәле конкурстарҙың береһе, "Кроссовер" һүҙен инглиз теленән тәржемә иткәндә "Артылыш" тигән мәғәнәне бирә. Тимәк, был турнирҙа төрлө йүнәлештә, стилдә ижад иткән юғары кимәлдәге музыканттар, зауыҡлы ижадсылар үҙ-ара ярыша. Шулар араһында иң ҙур баһаға лайыҡ булған Роберт ЮЛДАШЕВ конкурстан алған тәьҫораттары һәм, ғөмүмән, ҡурай хаҡында бәйән итә.**

# Ҡурай һәм Ҡөрьән – икеһе бергә бөйөк

## Милли ҡоралдарҙа ғына уйнаныҡ

Быға тиклем ҡатнашҡан халыҡ-ара конкурстарҙың кимәле Рәсәй конкурстары кимәленән түбәнерәк була торғайны. Шуға күрә "халыҡ-ара" тигән ҙур исем йөрөткән ярыштарҙа ҡатнашыуы, еңеү яулауы әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай ине. Әммә "Терем кроссовер" башҡа халыҡ-ара конкурстарҙан айырылып тора. Уны ысын мәғәнәһендә музыканттар турниры, тип атайҙар. Жюри составына ваҡытында Оскар премияһына эйә булған Гиора Фейдман кеүек донъя кимәлендә танылыу яулаған билдәле музыка оҫталары саҡырыла. Шуға был конкурсҡа төрлө илдәрҙән талантлы коллективтар ылыға. Ҡыҫҡаһы, ярыштың кимәле юғары, тип әйтмәксемен.

Беренсе турҙа ҡатнашыусыларҙы алдан ебәрелгән видеояҙмалары буйынса һайлап алдылар. 17 илдән ҡатнашҡан 70 коллективтың 32-һе икенсе турға үтте. Беҙ ниндәйҙер урын алыуҙы маҡсат итеп ҡуймағайныҡ. Ярышҡа тәү сиратта музыканттарҙың оҫталыҡ кимәлен күрер, өйрәнер өсөн барғайныҡ. Положение буйынса электрон музыка ҡоралдарын ҡулланыу тыйыла, тиелгән шартты һуңлап ҡына белеп ҡалдыҡ. Шуға сәхнәгә сығыуға ике ай ваҡыт самаһы ҡалғас, ашығыс рәүештә башҡа инструменттарҙы үҙләштерә башланыҡ. Синтезаторҙа уйнаған егетебеҙ бас-думбыраны өйрәнде. Барабан урынына дөңгөрҙө һайланыҡ. Гитараларҙы ла милли музыка ҡоралдарына алыштырҙыҡ. Икенсе турҙа сығыш яһағандан һуң ойоштороусыларҙың береһе беҙгә, гала-концертта уйнаясаҡһығыҙ, тине. Беҙҙе конкурстан тыш, ҡунаҡ булараҡ ҡына уйнатырҙар, тип уйлап ҡуйҙыҡ. Шуға ла өсөнсө турға үтеүселәрҙе иғлан иткәндә беҙҙең исемдең дә яңғырауы көтөлмәгән шатлыҡ булды. Өҫтәүенә, һуңғы турға үткән 13 коллектив араһынан иң күп балл йыйыусы беҙ булғанбыҙ икән. Гала-концертта ҡатнашыусылар араһынан еңеүсене залдағы тамашасылар һәм телевизор аша күҙәтеүселәр тауышы билдәләне. Конкурс барышын ҡалалағы телевизион каналдарҙың береһе күрһәткәйне. Иң күп тауыш йыйыусы "Тамашасы һөйөүен яулаусы" призына эйә була, тигән һүҙ. Ә тамашасы һәм жюри фекере бергә тап килһә, гран-при тапшырыла. Еңеүселәрҙе билдәләү тантанаһында иң тәүҙә беҙҙе ҡотлап, "Милли үҙенсәлек өсөн" номинацияһын тапшырҙылар. Ғәҙәттә, кем беренсе булып ҡотлана, шул иң түбәнге урын алған була бит. Шуға егеттәрҙең күңеле бер аҙ төшөп китте. Өсөнсө, икенсе урын алыусыларҙы иғлан итеп бөткәс, жюри: "Беренсе урынды бер кемгә лә бирмәҫкә булдыҡ, сөнки бөтә коллективтар ҙа бер кимәлдә уйнаны", - тип белдерҙе. Һәм иң аҙаҡтан "Тамашасы һөйөүе призы" Башҡортостандан "Ҡурайсы" командаһына тапшырыла", тип иғлан иттеләр. Ысынында, был беренсе урынға һәм еңеүсе исемен алыуға тиң булды.

## Музыканың энергетикаһы ҡайҙан килә?

Сит тарафтарҙа ҡурайҙы бик ыңғай ҡабул итәләр. Таң ҡалып, ҡурай тауышының һәр тулҡынын күңелдәренә һеңдереп тыңлайҙар. Беҙҙә ҡурай тауышын ишетеп өйрәнгәнгәме икән, уға иғтибар биреп еткермәйҙәр. Берәй популяр фестивалдә ҡатнашһаҡ, беҙҙе, бәлки, күрмәҫтәр ҙә ине. Ә һуңғы конкурста музыканы бик тәрән аңлаған жюри баһаланы. Шуға күрә, ундай оҫталар алдында уйнауы бик еңел ине. Конкурста "Сыңрау торна" көйөн башҡарғайныҡ. Моңға һалынған драматик тойғоларҙы, афәт яңғырашин, яу-ут тауышын тотоп алғандар, ахыры, сығышыбыҙҙан һуң: "Һеҙ башҡарған көйҙә агрессив энергетика ишетелә, әммә шул энергетика аша беҙ Аллаһы Тәғәлә кешене бар иткән заманға, ир-аттың ысын мәғәнәһендә һунарсы, яугир булған дәүергә ҡайттыҡ. Музыкағыҙ менән боронғолоҡто тойорға мөмкинлек бирәһегеҙ", - тинеләр. Тимәк, ҡурай кешелә иң тәрән тойғоларҙы уятыу көсөнә эйә. Конкурста тап музыкаль тауыштың кешегә физик яҡтан тәьҫире баһалау критерийҙарының береһе булып торҙо. Шул йәһәттән иң күп балл йыйҙыҡ. Ләкин төркөмөбөҙ профессиональ йәһәттән шәп тип әйтеүе ҡыйын, егеттәр халыҡ ҡоралдарында әле һайыраҡ уйнай. Быны беҙ образға кереп, шул образдың энергетикаһын еткереп башҡарыуыбыҙ менән ҡаплайбыҙ. Йәй көнө тәбиғәткә сығып, Уралға менеп, тау һыуына сумып, үҙебеҙсә медитатив күнекмәләр яһап алғайныҡ. Был да образға инергә ярҙам иткәндер.

*Конкурста "Сыңрау торна" көйөн башҡарғайныҡ. Моңға һалынған драматик тойғоларҙы, афәт яңғырашин, яу-ут тауышын тотоп алғандар, ахыры, сығышыбыҙҙан һуң: "Һеҙ башҡарған көйҙә агрессив энергетика ишетелә, әммә шул энергетика аша беҙ Аллаһы Тәғәлә кешене бар иткән заманға, ир-аттың ысын мәғәнәһендә һунарсы, яугир булған дәүергә ҡайттыҡ. Музыкағыҙ менән боронғолоҡто тойорға мөмкинлек бирәһегеҙ", - тинеләр. Тимәк, ҡурай кешелә иң тәрән тойғоларҙы уятыу көсөнә эйә. Конкурста тап музыкаль тауыштың кешегә физик яҡтан тәьҫире баһалау критерийҙарының береһе булып торҙо. Шул йәһәттән иң күп балл йыйҙыҡ.*

Бер бейеү коллективы менән сит илдә сығыш яһарға тура килде. Республика ансамбле булһа ла, ул тик башҡа халыҡтарҙың бейеүҙәрен башҡарҙы. Етәксеһенә: "Ни эшләп башҡорт бейеүҙәрен бейемәйһегеҙ, беҙ бында Башҡортостанды күрһәтмәйбеҙме ни?"- тип, үҙ дәғүәләремде әйттем. Ул, аҡланып, башҡорт бейеүҙәренең энергетикаһы түбәнерәк, шуға башҡа коллективтар араһында юғалып ҡалмаҫ өсөн икенсе халыҡ бейеүҙәрен башҡарабыҙ, тигәйне. Был фекер менән килешмәнем, сөнки беләм: музыка энергетикалы булһа, был бейеү хәрәкәттәрендә лә сағыласаҡ. Шулай ҙа ансамбль етәксеһенең һүҙҙәре мине музыка яңғырашы тураһында уйландырҙы. Бер заман стадионда ойошторолған концертта өс музыканттан торған төркөмдө күҙәтергә тура килде. Көйҙәре бер баян һәм ике барабан тауышынан торҙо. Әммә музыканттар ихлас, бирелеп уйнауҙары менән бөтә стадионды үрә баҫтырып ҡуйҙы. Тимәк, энергетиканы бирер өсөн сығыш яһаусыларҙың һаны мөһим түгел, ә ихласлығы кәрәк. Ҡурайға дөңгөр тауышын ҡушып башҡарыу тураһында алдан да уйланып йөрөгәйнем. Ә бына ошо өс музыканттың сығышы һуҡма ҡоралдар ҡеүәтен күрһәтте һәм ниәтемде тағы ла нығытты.

## Уңыш ихласлыҡтан килә

Шулай ҙа эш музыка ҡоралында ғына ла түгел, ә көйҙө ихлас башҡарыуҙа. Телевизорҙан Иглин районында уҙғарылған Мәғәфүр Хисмәтуллин исемендәге конкурсты ҡарарға тура килде. Беҙҙең йырсылар тырышып-тырмашып оҙон көй башҡара, ләкин береһе лә күңелде әсир итмәй, тәрән төшөп йырламайҙар кеүек. Сәхнәгә Ҡалмыҡстандан килгән джунғарсы, эпостар башҡарыусы Мамыт Иһадзам сыҡты. Уның йырлауы шул тиклем көслө тәьҫир итте. Миндә шул кеше менән осрашыу теләге тыуҙы. Ҡалмыҡ йырсыһы менән һөйләшкәндән һуң, йырҙы ятлап ҡына, тота килеп башҡарыуҙың бер файҙаһы ла юҡ, тигән хәҡиҡәткә йәнә бер тапҡыр төшөндөм. Бөтә ҡалмыҡ йырсылары йәки монгол, тыва башҡарыусылары юғары кимәлдәге музыканттар, тип әйтмәйем. Оҫталыҡ һәр бер кешенең күңел тәрәнлегенән, рухи байлығынан тора.

Һаманға тиклем белорус гитарасыһы Валерий Дидюля феноменын аңлай алмайҙар. Уның сығыштарын телевидение аша күрһәтмәйҙәр, радиола ла көйҙәре һирәк яңғырай. Әммә ижадын һөйөүселәр йылдан-йыл арта. Ул да, эш музыка ҡоралында түгел, ә ихласлыҡта, ти.

Фарер утрауҙарынан Эйвор исемле йырсы бар. Нигеҙҙә, этник көйҙәрҙе башҡара. Донъя буйлап ҡуйылған концерттары аншлагтар менән үтә. Беҙгә лә уның концертына барыу бәхете тейҙе. Йырсы залдағы тамашасыларҙы тәүге йыры менән үк арбап алды. Һәр кемдең күҙенән йәштәр аҡты. Билдәлелек, матди килем яғынан шоу-бизнестағы йырсылар менән тиңләшә алмаһа ла, Эйвор уларҙан күпкә талантлыраҡ. Үҙенең миссияһын тапҡан, тип әйтергә була. Ул башҡарған йырҙарҙы тыңлағанда изге китап уҡыйһың һымаҡ. Һәр кем мәсеткә йәки сиркәүгә йөрөмәй бит инде. Ә Эйворҙың конертынан һуң рухи яҡтан таҙарынып ҡайтып китәләр. Бәлки, кемдеңдер уның сығышын тыңлағандан һуң изге йортҡа йөрөү ихтыяжы ла тыуалыр. Тимәк, кеше, беҙҙең осраҡта йырсы, башҡаларҙың күңеленә ниндәйҙер рухи орлоҡ һала ала икән, Аллаһы Тәғәлә алдында уға сауап яҙаласаҡ. Сауап аҡса рәүешендә лә биреләсәк, әлбиттә.

## Яратҡан шөғөл аҡсалы була аламы?

90-сы йылдарҙа, аҡса етмәгәнлектәнме икән, бизнес менән шөғөлләнергә булып киттем. Ул ваҡытта ҡурайсы булараҡ та танылып өлгөргәйнем. Йомабай Иҫәнбаев исемендәге ҡурайсылар конкурсында гран-при яулағайным. "Аманат", "Аҡйондоҙ" төркөмдәрендә уйнап, халыҡ араһында популяр булып та киткәйнем. Шулай ҙа эшҡыуарлыҡ менән мауығып киттем. Ул ваҡыта һирәк осрай торған импорт майға төргәктәр эшләй инек. Тик эш аҡсалы булһа ла, күңелгә ятманы. "Был донъяға аҡса өсөн генә килгәнменме ни?" тигән һорау күңелде өйкәй башланы. Аллаһы Тәғәлә уйҙарыңды белеп тора бит ул. Көндәрҙең береһендә бер ансамблдә уйнарға тәҡдим яһанылар. Унда кларнетсы урыны бушаған булған икән. Бер ай булһа ла, эшләп ҡарарға булдым. Баҡтиһәң, музыка шул тиклем һағындырған. Рәхәтләнеп күңел өсөн эшләү һәм шуның өсөн аҡса ла алыу ижади ҡәнәғәтлек тойғоһон яҡынан ҡайтарҙы. Әлбиттә, сәнғәттә килем күпкә түбәнерәк. Әммә эш аҡсала түгел, иң мөһиме, күңеленә яткан шөғөлөң булырға тейеш.

Гарик Сукачев тигән билдәле Рәсәй музыкантының төркөмөндә бер баянсы булды. Ләкин ул эш хаҡы менән ҡәнәғәт булмайынса, "Етәксе үҙенә яхталар һатып ала, ә беҙ йөҙ доллар өсөн тир түгәбеҙ", тип, төркөмдән китте. Һуңынан уң ҡулын фалиж һуҡҡанын белеп ҡалдым. Ә баянсы өсөн уң ҡулды юғалтыу - эшһеҙ ҡалыу, тигән һүҙ. Был ваҡиға тураһында уйланып, үҙем өсөн шундай һығымта яһаным: Аллаһы Тәғәлә музы-

кантҡа көнләшкәне һәм һөнәренә ихлас ҡарамауы өсөн яза ебәргән. Хоҙай ул музыкантҡа күренекле төркөм етәксеһенең эргәһендә тороп уйнарға мөмкинлек биргән. Шул мөмкинлекте ҡәҙерләп, баһалап етелмәгән. Тимәк, эшенде ихлас башҡармаһаң, аҡсаһы ла килмәй, хатта булғаныңды юғалтыуың ихтимал.

Николай Носков төркөмө составында сығыш яһап йөрөгән саҡ ине. Концерттарҙың береһендә нишләптер айырыуса бирелеп уйнаным. Концерт тамамланғас, ылыҡтырғыс тәҡдим яһанылар. Төркөмдөң бағыусылары: "Әйҙә, беҙ һиңә Мәскәүҙә фатир алып бирәбеҙ, Носковҡа һинең кеүек музыкант кәрәк", - тинекулға алғас, сәскә матурлығын да һиҙҙем. Йәғни ҡурай минә донъяны тәрәнерәк тойорға, ҡабул итергә ярҙам итәләр.

Ҡурай серҙәренең әле бер проценты ла асылып етмәгән, тип уйлайым. Классик стилдәге музыкала уны яныса асырға мөмкин. Конкурстарҙың береһендә ҡурайҙа Иоганн Бахтың әҫәрен башҡарырға тура килде. Баҡтиһәң, классик әҫәрҙәргә ҡурай тауышы тап килеп тора икән. Әйтерһең дә, Бахтың көйҙәре нәҡ ҡурай өсөн яҙылған. Сығыштан һуң тамашасылар, ҡурай иң нескә тойғоларҙы ҡуҙғатты, тип әйтте. Шуға күрә, ҡурайҙа халыҡ көйҙәре менән бергә классик Европа музыкаһын да ҡолас йәйеп башҡарырға була.

Спиваковка үҙем барҙым. Башта битарафыраҡ ҡабул итте. Әммә көпшә ҡурай тауышын ишеткәс, йөҙө үҙгәреп, яҡтырып китте. Һанап үтелгән кешеләр менән эшләү минең өсөн ҙур тәжрибә мәктәбе булды. Носков төркөмөндә бернисә йыл рәттән гастролдәргә сығып, музыканттар менән репетициялар үткәреү оҫталығына өйрәнелде. Сукачев - һөнәре буйынса режиссер. Уның менән фильмдарға музыка яҙа торғайныҡ. Көйҙә үҙенсәлекле итеп тыуҙыра инек. Минә видеояҙмала тәбиғәт күренештәрен күрһәтәләр. Ә мин шуны ҡурай моно менән һүрәтләп бирергә тейешмен. Йәғни ноталар юҡ, аккордтар ғына яңғырай, шуға рәссам беҙгә юл сығымдарын түләр өсөн бағыусылар табырға кәрәк.

### Тамырҙарға таянған ижад ҡына матур була ала

Аллаһы Тәғәлә кешеләргә һәләтте бер тигеҙ итеп бирә. Шуға күрә бөтә балалар ҙа тыумыштан талантлы. Тик һәр кемдең үҙ миссияһы, үҙ юлы барҙыр. Музыка сәнғәтенән генә алып әйтәм: күнекмәләр ярҙамында мускулдарҙы үҫтереп булған кеүек, музыкаль тауышты ла үҫтереп була. Тик тауышты аса белгән педагогтар булырға тейеш.

Йәш йырсылар күп. Әммә уларҙың бик һирәктәре генә

### Ҡурай һарайы кәрәк

Бөтә нәмә Хоҙайҙан килә. Уның теләгенән тыш, ағастан бер япраҡ та төшмәй. Шуға пландар тураһында алдан ҡысҡырып әйтеү бик үк дөрөҫ булмаҫтыр. Бер нәмәгә инанам: ҡурайҙың киләсәге яҡты булыр, иншалла. Халыҡ ҡоралын үҫтереү буйынса эштәр бик күп. Башҡа халыҡтарҙың тәжрибәһенән дә файҙаланырға кәрәктер. Тываларҙың, мәҫәлән, өҙләү сәнғәте буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге бар. Беҙҙә "Ҡурай һарайы" тигәнерәк үҙәк йәки ойошма төҙөргә булыр ине. Хоҙай хаҡында уйламаған кеше юҡтыр. Хоҙай беҙҙе милләт итеп яралтҡан икән, үҙ моңобоҙҙо, телебеҙҙе һаҡлау Аллаһы Тәғәләгә белдерелгән иң ҙур ихтирамыбыҙ булып тора.

# ИМАН СЫҒАНАҒЫ,

## көскә әүерелә

ләр. Тик тәкдимдән баш тарттым. Сөнки ул мәлдә үҙ командамды туплай башлағайным инде. Мәскәүҙә рухлы башҡорт музыкант егеттәрҙе табып булмаҫ, тип, Өфөлә ҡалдым. Тимәк, ихласлығың менән матди ҡиммәттәргә лә өлгәшеп була. Аҡсаға ҡарамай, эшеңде мөкиббән башҡараһың икән, Аллаһы Тәғәлә үҙе яйын таптырып торасаҡ, күңелеңде киң тотһаң, уныштың ҡайҙан килеп ингәнен дә белмәй ҡаласаҡһың.

### Ҡурай менән динде айырып ҡарамайым

Намаҙға баҫҡандан һуң ҡурай моңон икенсе төрләрәк ҡабул итә, башҡасараҡ тоя башланым. Намаҙ уҡыу көй-моңдоң энергетикаһын сафландыра кеүек. Ҡурай моңон да тәрәнерәк, илаһиыраҡ яңғыратам төҫлө. Музыкала ла төрлө энергетика бар. Насар, түбән тойғоларҙы тыуҙырғандары ла була. Дин ошо кире хис-тойғоларҙан аралай. Шуға сәнғәт менән динде, ҡурай уйнау менән намаҙ уҡыуҙы айырып ҡарамайым хәҙер. Ата-бабаларыбыҙҙың дине лә, ҡурайы ла булған бит. Ҡурайҙың үҙен иман сығанағы, күңелде сафландырыусы ҡорал итеп ҡабул итергә була. Әммә дин ҡурай ҡөҙрәтен тағы ла көсәйтә.

Кеше хәҙер тәбиғәттән шул тиклем айырылған. Боронғоларҙың был донъяны нисек аңлағанын, күргәндәрен күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Беҙҙең ата-бабалар тәбиғәтте һаҡлаған, Аллаһы Тәғәлә булдырған матурлыҡты исраф итмәгән бит. Ә ҡурай тәбиғәткә яҡыныраҡ булыу мөмкинлеген бирә. Ҡурайҙа уйнағандан һуң күкте киңерәк тоя башлайым кеүек. Элек бер ваҡытта ла сәскәләргә иғтибар итмәй торғайным. Ҡурайҙы

Ҡурайҙың традицион формаһын һаҡлап ҡалыу яғындамын. Уға өҫтәп уйымдар эшләү, тағы нисектер үҙгәртергә тырышыу - халыҡ ҡоралын мәсхәрәләү генә тип һанайым. Бәлки, кемдер үҙенсә шулай эҙләнергә ынтылалыр. Ләкин Аллаһы Тәғәлә ҡурайҙы нисек бүләк иткән, ата-бабаларыбыҙ беҙгә нисек еткергән, шул килеш һаҡлау фарыз. Ҡурайҙы үҙгәртергә хаҡыбыҙ ҙа юҡ. Сөнки ата-бабаларыбыҙ кеүек уйнай белмәйбеҙ әле. Улар тойған моң тәрәнлеген беҙ тойоп еткермәйбеҙ.

### Ижад мәктәбе хаҡында

Рәсәй, донъя кимәлендәге музыканттар менән сығыш яһау теләге күптән бар ине. Әммә барыһы ла кинәт кенә килеп сыҡманы. Оҙаҡ ҡына ваҡыт форсат та, мөмкинлек тә табылманы. Бер мәл Өфөгә күренекле әрмән композиторы, дудукта уйнаусы Дживан Гаспарян концерт менән килеп төштө. Ҡурай тотоп, шул концертҡа йүгәлдем. Шунда Николай Носков менән танышыу бәхете тейҙе. Ҡурайҙа уйнауымды тыңлағандан һуң, Носков мине Мәскәүҙә сығыш яһарға саҡырҙы. Носков менән хеҙмәттәшлек шулай башланып китте. Гарик Сукачев менән дә ул Өфөгә килгән саҡта танышттыҡ. Билдәле дирижер, скрипкасы Владимир

һымаҡ биҙәктәр төшөрәһең. Спиваковтың оркестрында уйнау дисциплина йәһәтенән сыныҡтырҙы.

Борис Гребенщиков тигән рок-музыкант та үҙенсәлекле. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, былтыр Торатауҙы яҡлап ойошторолған концертҡа ул килә алманы. Сөнки финанс ярҙам етмәгәнлектән, юл сығымдарын түләү мәсьәләһе аҙағынаса хәл ителмәне. Былтыр Ҡаҙанда үткән "Сотворение мира" фестивалендә "Асыш" номинацияһында еңеп сыҡҡайныҡ. Гребенщиков шунда беҙҙең ижадыбыҙ тураһында белеп ҡалған. Юбилей гастролдәре сиктәрендә быйыл ул Өфөлә лә концерт ҡуйҙы. Концертына килеп, күрешкәс: "Әйҙә, сәхнәгә бергә сығайыҡ", - тип тәҡдим итте. Сәхнәгә сығырға уйҙа ла булмағайны. Минең эргәлә костюм да, ҡурай ҙа юҡ. Машинаһы менән килгән танышыма мөрәжәғәт итергә тура килде. Ул тиҙ генә костюмымды, ҡурайҙы алып килде. Бер 15 минут репетиция яһаныҡ та, сәхнәгә сыҡтыҡ. Шулай итеп Гребенщиков концертында тәүгә тапҡыр ҡурай яңғыраны. Быйыл да Гребенщиков Торатау эргәһендә үтәсәк концертты үҙ графигына индерергә әҙерләгеләр белдерҙе. Унда ул сит ил музыканттарын да саҡыра ала. Буласаҡ концерт хаҡында Ирландия, Дания рок йырсыларына хәбәр итеп тә өлгөргән икән. "Изге тауға тейергә ярамай, Торатау яҙмышы хаҡында халыҡ-ара йәмәғәтселек белергә тейеш", ти Гребенщиков. Тик башҡорт музыкаһы традицияларына таянып эшләй. Күптәрененң ижады көнбайыш йырсыларын эләкләүгә генә ҡоролған. Был тышҡы ялтырауыҡ ҡына, моңдо аңлаған кешегә ул ҡыҙыҡ түгел. Ата-бабаларыбыҙҙан шундай ҙур моң хазинаһы ҡалған. Ул хазинаны өйрәнеп, эҙләнеп, төшөнөп, ижадыңда файҙаланһаң, колоритлы, "тәмле" әйбер тыуҙырырға була. Ә бөгөн радиола сәғәттәр буйы бер генә йыр яңғыраған һымаҡ тойола. Әйтерһең, көйҙәрҙе бер генә композитор яҙған.



***Намаҙға баҫҡандан һуң ҡурай моңон икенсе төрләрәк ҡабул итә, башҡасараҡ тоя башланым. Намаҙ уҡыу көй-моңдоң энергетикаһын сафландыра кеүек. Ҡурай моңон да тәрәнерәк, илаһиыраҡ яңғыратам төҫлө. Музыкала ла төрлө энергетика бар. Насар, түбән тойғоларҙы тыуҙырғандары ла була. Дин ошо кире хис-тойғоларҙан аралай. Шуға сәнғәт менән динде, ҡурай уйнау менән намаҙ уҡыуҙы айырып ҡарамайым хәҙер. Ата-бабаларыбыҙҙың дине лә, ҡурайы ла булған бит. Ҡурайҙың үҙен иман сығанағы, күңелде сафландырыусы ҡорал итеп ҡабул итергә була. Әммә дин ҡурай ҡөҙрәтен тағы ла көсәйтә.***

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Роберт Юлдашев, тыйнаҡ кеше булараҡ, тамашасылар һөйөүен беҙ түгел, ә ҡурай яуланы, ти. Әлбиттә, был һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ та бар. Сөнки ҡурай - иң боронғо уйын ҡоралдарының береһе, шуға ла кеше күңеленең төпкөл хис-тойғоларын уята, түбәнге аң хәтерен ҡуҙғата ала. Тап шуның өсөн дә ҡурай тауышын башҡа халыҡтар ҙа үҙ итә. Әммә ҡурай ысын оҫтаның ҡулында ғына бар сағыулығында асыла алалыр. Быны Роберт Юлдашев миҫалы ла раҫлай булыр.**

**Мөнир ИҠСАНОВ яҙып алды.**

✓ ***Аптыраны Үлмәҫҡол. Илдә бындай ҙа кешеләр бармы ни? Мин әллә немец фашистарының бындағы бер иленең күләгәһендә йөрөйөм микән? Нишләп беҙ, һау ҡалғандар, аяҡһыҙҙар, ҡулһыҙҙар бындай кешеләрҙе һаҡлап һуғыштыҡ әле?***






Юл кеүек таҡыр ерҙән бара торғас, алда әкрен генә геүләп бер машина үткәнен күреп ҡалды. Тимәк, унда юл бар, тип шул йүнәлештә атланы Үлмәҫбай. Бара торғас, юлға төштө. Төштө лә, хәҙер инде үҙе белгән боронғо юлды төҫмөрләп, иҫке Мейәс ҡасабаһы аша ауылына илткән юл башына йүнәлде. Урамда ла, хатта йорттарҙа ла ут юҡ. Ҡараңғы. Өҫтө ҡуржаҡ боҙ менән ҡапланған юл күләүегенә килеп керәһеңме, ташҡа һөрөнәһеңме, барыһы ла уның аяҡ аҫтында ҡарауыллап ята кеүек.

Оҙаҡ ҡына атланы Үлмәҫҡол. Хатта йылынып, ирәбәйеп китте. Аяҡтарын һуҙып-һуҙып атларға кереште. Ҡаланың ситенә килеп сыҡты. Ҡайһы юл менән ҡайтырға, тигән уй башына килеп ингән килеш, юл һайлай башланы. Тәүгеһе оло юл. Уны бөгөн "Ям юлы" тип атағандар. 1900 йылдарҙан һуң Ям юлы халыҡ телендә "Яңы һуғыш юлы" тип йөрөтөлә башланы. Сөнки районның барлыҡ яугирҙәре лә 1904 йылғы япон һуғышына ла, 1914 йылғы Беренсе ипмериалистик һуғышҡа ла, революция, Граждандар һуғышына ла, тағы ла фин һәм 1941 йылғы Ватан һуғыштарына ла шул юл менән Мейәс ҡалаһы аша киткән. Осор үтеү менән исемдәр ҙә онотола. Үлмәҫҡол, ана шул һуғыш юлы менән барып, Устиново тип аталған староверҙар ауылы аша ҡайтырғамы, әллә һуғышҡа тиклем йөрөгән турараҡ кеүек тойолған һанама юл менән атларғамы, тип икеләнеберәк килде.

Бына, алда ғына ята кеүек ауылы. Унда, йортонда, бер-берeһенә һырығышып, мыш-мыш килеп балаҡайҙары йоҡлайҙыр. Ә Хәлиҙәһе? Хәлиҙәһе йоҡлаймы икән? Үлмәҫҡолдоң күкрәгенә бөтмәҫтәй шатлыҡ тулды. Ҡайһы юл менән? Ҡайһы юл менән ҡайтырға? Тура юл, һанама булһа ла, йә алтын йыуыуҙан ҡалған отвалдар, йә ҡырсынташтар түшәлгән уйпаттар аша туп-тура ауыл осона килтереп сығара. Ләкин унда ҡараңғылыҡ. Таллыҡтар эсенән дә үтергә тура килә. Ә урауыраҡ оло юл менән барғанда иҫке динлеләрҙең тораҡтарын үтеү менән ауылға боролаһың. Унда дүрт саҡрымдай ғына юл ҡала.

Шул арала төн тағы ла ҡараңғыланды. Болоттар күптән инде ай-йондоҙҙарҙы ҡаплаған булһа ла, хәҙер ул юрғандай ҡабарып, күпсеп, тағы ла ҡалынайҙы. Ҡалынайҙы ла, ябалаҡ-ябалаҡ итеп ҡар яуырға тотондо. Тура һуҡмаҡ башы бөтөнләйгә тома ҡараңғылыҡҡа сумғас, ул боролоп, кире оло юлға сыҡты. Ни тиһәң дә, бында юл киңерәк, үҙе ҡаты. Ә ҡар яумай, күктән ҡойола ла ҡойола. Алдағы иҫке динлеләр ауылына һигеҙ-туғыҙ саҡрым юл бар әле. Ҡапыл һалҡынайтты. Ел көсәйҙе. Үлмәҫҡолдоң шинелен госпиталдә үк урлағайнылар. Юҡсыллыҡ, ашау-тәғәмгә генә түгел, кейем-һалымға ла ҙур ҡытлыҡ бит. Ике-өс көндән эшелонға тейәлеп, Новосибирск госпиталенә китеү билдәле булғас, өҫтөнә шинеле булмағанлығын аңғарып, нәмәлер йүнәтә башлағайны, уға иҫке генә бишмәт кеүек нәмә табып бирҙеләр. Бик ҡыҫҡа ла, йоҡа ла шул бишмәтендә ине ул. Әммә өҫтө йоҡа булыуы тураһында уйламай, атланы ла атланы ул юлдан. Ә ҡар яуҙы ла яуҙы. Бик асыҡты. Әммә тоҡсайын асып, ундағы ярты булка икмәген ашарға теләмәне. Малайҙарына һаҡланы. Уларға күстәнәскә бер консерва һәм шул ярты булка ҡара икмәктән башҡа бер нәмә лә юҡ. Ә улар атайҙарының ҡайтып килеүен беләләрҙер. Көн һайын көтәләрҙер. Сөнки Новосибирскиға юл тотоуҙарын белеү менән ул өсмөйөшлө хат ебәргәйне...

Килә торғас, төн яҡтырғандай тойолдо. Тирә-йүн ап-аҡ булды. Ҡар йырып килә торғас, ул тирләне, лысма һыу булды. Бик һыуһаны. Эттәр өрөүен ишеткәс, туҡтаны. Нисә йыл инде ул ауылда эттәр өрөүен ишеткәне юҡ. Был тауыштар уға шул тиклем үҙ, яҡын, туған кеүек ине. Бер аҙ тыңлап торҙо ла ҡәтғи ҡарар менән ауылға атланы. Тәҙрә, ҡапҡа ҡағырмын. Бик кисәү булһа ла, берәйһе керетер, бәлки, сәй эсерер. Әҙерәк ял итермен, әҙ-мәҙ булһа ла кибенермен. Унан сығып, ауылыма атлармын, тип уйланы. Был ауылда тик алтын йыуыу менән шөғөлләнгән кешеләр йәшәгәнен белә ине Үлмәҫҡол. Урам яҡтан баҡсаһы булмаған тәүге өйҙөң тәҙрәһен ҡаҡты. Әммә һис бер кем тауыш-тын бирмәне. Тағы ла, тағы ла ҡаҡты. Юҡ. Һис берәү ҙә өндәшмәне. Аптырағас, ситкәрәк китеп, бер аҙ көтөп торҙо. Тәҙрә пәрҙәһе ситтән генә асылды ла кире ябылды. Эстә һүрән генә ут янды. Кемдер тышҡа сығып, тәмәке тоҡандырҙы. Ҡапҡа эсендә лаулап өргән этте, күрәһең, сынйырынан ысҡындырҙы. Былай ҙа ғәйәрләнеп лаулаған Барбос ҡапҡаға килеп аҫылынды.

Бындай ҡаршылауҙы аңлаған Үлмәҫҡол урам буйлап алға атланы. Бына был өй мәрхәмәтлелер, тигән уйҙа тағы ла ҡапҡа ҡаҡты. Был өйҙән дә тауыш биреүсе булманы. Тәүгеһендәге кеүек, тәҙрә ябыуын астылар ҙа, ҙур йөнлө баш уға төкәлде. Үлмәҫҡол уға кем булыуын, ҡайҙан килеүен, ҡайҙа барыуын әйтте. Йылынып сығырға, лысма һыу аяҡтарын киптереп алырға һораны. Тыныс ҡына тыңланы буғай йөнлө ҙур баш тәҙрә аша. Унан һуң пәрҙә ябылды. Һәм - ләм-мим. Ҡапҡа ана асылыр, бына асылыр тип көтөп тора-тора өшөй башланы. Ахырҙа, тағы ла урам буйлап алға китте. Аслыҡтан интегеп, төнө буйы темеҫкенеп йөрөгән бер нисә эт лауылдап уны урам буйлап абалап килде.

Уны өсөнсө өйгә лә индермәнеләр. Һәм ул ауыл осонда торған ҙур, тыштан ҡарағанда бай йорт ҡапҡаһы төбөнә килде. Һыңар ҡул менән ҡапҡа ҡаға башланы. Кемдер сыҡты. Көрһөндө. Уның артынан тағы ла икенсеһе сыҡты. Ҡапҡа аша "Че надобно?" тигән ҡалын тауыш ишетелде. Үлмәҫҡол тағы ла ҡайҙан килеүен, ҡайҙа барыуын төшөндөрҙө. Йылынып сығырға һораны. Ә төн һалҡынайғандан һалҡынайҙы. Көтә торғас, күптән дә түгел тирләп килгән Үлмәҫҡолдоң тәненә зымбырлап һыуыҡ йәбеште. Бигерәк тә сөрөшөп, ослайып күгәреп ҡатҡан сулаҡ тупыс ҡулы өшөй, әсетә ине.

Ҡапҡа эсенән яңғыраған "Че надобно?" тигән ауазда хәлгә керерлек бер ниндәй өмөт саҡҡыһы һиҙелмәһә лә, керетеүҙәренә өмөтөн юғалтманы Үлмәҫҡол. Уның кем булыуын, ҡайҙан килеүен тыңлап та бөтмәне ҡапҡа арьяғындағы кеше. Винтовка затворының асып ябылған тауышын ап-асыҡ ишетте ул. Нимә-нимә, ә затвор асылып ябылған тауышты ул тимер тауыштарының барыһына ҡарағанда ла яҡшыраҡ белә. Ул тауыш дүрт йыл буйына көнө лә, төнө лә янда булды. Ҡалын тауыш әллә үҙҙәренең псалма доғаларынан, әллә донъяуи тәғлимәттәренән һорау бирҙе. Әммә уны Үлмәҫҡол аңламаны. Урыҫтар менән иңгә-иң терәп окопта ятһа ла, бер ҡасканан бутҡа ашаһа ла, бер төпсөктә сиратлап һурһа ла, бындай һорауҙарҙы, һүҙҙәрҙе ишеткәне булманы. Шуға күрә һис бер һүҙ әйтә алманы. "Слушай, путник, мы тебя, иноверца, не пущаем, тем более инородца. Иди, сейчас же ступай своей дорогой. Иначе..." - тип тағы ла затвор шылтыратты.

Аптыраны Үлмәҫҡол. Илдә бындай ҙа кешеләр бармы ни? Мин әллә немец фашистарының бындағы бер иленең күләгәһендә йөрөйөм микән? Миңә бит һуғышҡа тиклем бында, сит өлкә булһа ла, ауылым күршеһендә был тиклем мәрхәмәтһеҙ кешеләр осрамаһы. Хатта һуғышта ла. Бер туғандай бер-беребеҙҙе яҡланыҡ, һаҡланыҡ. Нишләп беҙ, һау ҡалғандар, аяҡһыҙҙар, ҡулһыҙҙар бындай кешеләрҙе һаҡлап һуғыштыҡ әле? Мин дошманмы ни уларға? Шулай тип күңеле әрнеп, асыуы килеп, тағы ла ҡапҡаларын типкесләр сиккә еткәйне Үлмәҫҡол... Эх! Ике ҡуллы ла булһам, күрһәтер инем мин һеҙгә. Алҡымынан тотоп һелкеп һөйрәп сығарыр инем мин был һаҡалбайҙы. Тик... Үҙенең ғәрип, төптән үк өҙөлгән ҡулһыҙ, өҫтәүенә, уң ҡулһыҙ булыуына әсенеп, көсһөҙлөгөнә ғәрләнеп, сүгәләп-сәгәләп һулҡылданы Үлмәҫбай. Унан ҡапыл күңеле ҡатты. Кинәт тағы ла һыуыта башланы. Төньяҡтан һалҡын ел иҫте, ә Үлмәҫҡолдоң ауылы артындағы уға саҡ-саҡ төҫмөрләнгән Юлдыбай, Ҡыйҙыш тауҙары өҫтөн ҡап-ҡара болот ҡапланы. Үҙ ауылы артындағы тау армытының шәүләһен күреү ҙә уның күңеленә йылылыҡ хисе уятты.

Сығырынан сығарған тупаҫлыҡты, уны тыуҙырған һаҡалбайҙы, хатта уның ауылын да онотторҙо. Ул ауылдың фиғеле лә, уҫал эттәре лә, тупаҫ һаҡалбай ҙа әллә ҡайҙа юғалдылар ҙа ҡуйҙылар. Юлдыбай, Ҡыйҙыш тауынан, башҡорт Уралынан иҫкән ел йотто ул яманлыҡты, иманһыҙлыҡты, кешелекһеҙлекте! Тауҙарына, уның алдында әле уттары күренмәгән ауылына етеп килеүенә дәрте күтәрелеп, һуҙа-һуҙа баҫып атлай башланы Үлмәҫбай.

Кешелеклек тигән төшөнсәне белмәгән был иманһыҙ тораҡ ҡасандыр башҡорттарҙан заводчиктарға күскән яҫы түбә өҫтөндә ултыра. Ә аҫта түбәлектең итәген йыуып, Мейеслe һыуы аға. Һуғышҡа тиклем Үлмәҫҡол иптәштәре менән был ауылға килештерә ине. Бер нисә тоҡ һалынған арба тартып, ат еңел генә йылға аша сығыр ине. Улар старателдәрҙән игенгә, иткә, онға шәкәр, лампа ҡыуығы, кәрәсин, балаларға кәнфит, яҙырға ҡағыҙ һәм башҡа кәрәк-яраҡ алмаштыралар ине.

Был ауылдан йыраҡлашҡан һайын Үлмәҫҡол үҙ ауылы яғына ҡарап йөрәкһене. Бына йылға. Уның үрендәрәк тауулы баҫма була торғайны. Шуны эҙләп, йылға буйлап өҫкәрәк китте. Һыу үҙе тоташ туңмаған. Сит-сите ҡуржаҡланһа ла, уртаһы ҡап-ҡара булып бүлкелдәп ағып ята. Ә баҫма юҡ. Һыу эсенә ултыртылған бағаналар ҙа юҡ. Аптыраны Үлмәҫҡол. Староверҙар ауылы ҡабул итмәне. Бар, ҡайт, тине. Ә йылға, ашыҡма, был ярҙа берәйһенең бесәнлегендә булһа ла йоҡла, яҡтырғас, юлыңды дауам итерһең, тигәндәй, ҡап-ҡара булып ҡурҡытып ағып ята.

Йылға аша сығырға төрлө ысулдар уйлап ҡараһа ла, сара таба алманы Үлмәҫҡол. Ни булһа ла булыр, әҙ һыу кистемме мин фронтта, тип, тәүәккәлләне. Аяғындағы сылғауын, унан оҙон ҡуңыслы америка ботинкаһын систе. Юҡ, еүеш булыр, тип, йәшел галифе салбарын да һалды. Барыһын да һау ҡулы менән күтәреп, йылғаға керҙе. Сирҡандырғыс һыуыҡ ине һыу. Ни тиһәң дә, октябрь аҙағы. Төпкәрәк кергән һайын, һыу арта килде, тубығынан аша ботона етте. Тағы ла һыу күтәрелмәһен тип, бармаҡтары осона баҫып атларға кереште. Бына ул һыуҙың уртаһына етте. Ҡапыл аҫта ятҡан ләмгә аяҡ бармаҡтары тайып китте лә, ҡулындағы әйберҙәре, бер-береһенә бәйләнгән ботинкалары ҡулынан ысҡынып, һыуға төшөп китте. Тайыуҙан үҙе лә сөрсөп, саҡ-саҡ һыуға ҡоламай, инде буш һау ҡулы менән йылға төбөнә таянып, һыу уртлап килеп торҙо ла, шунда уҡ ҡуҙғалып, аға башлаған тоҡсайҙың бәйенән эләктереп алып, ярға һелтәне. Унан һуң һыу төбөнән ботинкаһын эҙләй башланы. Бәхеткә күрә, һыу тулған ауыр ботинкалар ҡапыл ғына ағып китмәгәйне. Икеһе бергә ялғанып бәйләнгән ботинка бауҙары ҡулына эләгеп, уларҙы тотоп, лысма һыу булғас, хәҙер инде сирҡанмай һыуҙан килеп сыҡты. Нишләргә? Тәүге уйы шул булды. Шунда уҡ бер ҡарарға килде. Һыу кейемдәрҙе һығып, ботинкаларҙың һыуын түгергә лә, кейенеп, йүгерергә. Йылғанан ауылға тиклем өс - өс ярым саҡрым булыр...

Үлмәҫҡол ауылына табан йүгерҙе. Ләкин уның алдында бер ниндәй ҙә юл булмай сыҡ-

✓ *Уның асыҡ көйө туңған күҙҙәре был йөнлө баш аша күк күгелйеменә, төпһөҙ зәңгәрлеккә баҡҡайны. Ә юғарыға күтәрелеп ҡатҡан һыңар ҡулы әле күрмәгән бәләкәс улына алып ҡайтып килгән ағас машинаны ҡыҫып тотҡайны.*



ты. Әллә ниндәй бейек, ҡомло-ташлы өйөмдәр, ҡырсынлыҡтар, таллыҡтар, һыулы соҡорҙар... Хатта бәләкәй күлдәр ҙә бар... Тағы ла аптыраны Үлмәҫҡол. Туҡтаны. Ян-яғына ҡаранды. Яңылыш киткәнмен тип уйлар ине, шул таныш кисеү аша сыҡты. Тик юл үҙгәргән. Элек тигеҙ ине. Үлмәҫҡол, һуғыш сыҡҡас, алтын табыу шөғөлө тағы ла көсәйеп, алтын йыуған драгалар, гидравликалар был урындың тетмәһен тетеп, бихисап күләүектәр, һыулы һәм һыуһыҙ соҡорҙар ҡалдырғанын белмәй ине. Ул ерҙәр ҡайҙа таллыҡтар, ҡайҙа ваҡ ҡырсынлыҡ, муйыллыҡ менән ҡапланып өлгөргәйне. Аҙашты Үлмәҫҡол. Күләүектәрҙе, отвалдарҙы урап йөрөй торғас, ҡараңғы төндә ул үҙенең төп йүнәлешен дә юғалтты. Ҡайһы яҡҡа барырға? Тауыш та, тын да юҡ. Еүеш гимнастерка, фуфайка шәрәмәте, салбар һалҡын елгә туңып, тәнгә йәбешә башланы. Юҡ! Былай торһам, мин боҙ булып ҡатам. Йүгерергә, йүгерергә кәрәк, тип уйлап, ҙур ғына күләүектең ситендә үк үҫкән таллыҡтарҙан янтая биреп, уларҙы һулдан сығып бара ине, ҡапыл аяҡтары баҫыр, терәр ер тапмай, бушлыҡҡа төшөп китте. Башы һәм ҡулбашы бик ныҡ һуғылыуҙан иҫен юғалтты. Тәне ҡатып туңып, ҡулбашы һыҙлауға түҙә алмайынса, ахыры, иҫенә килде. Күпме ятҡандыр. Күкте күрҙе. Өҫтә яп-яҡты ине. Ҡар ҙа яумай. Башындағы бүрке соҡор өҫтөндәге талға эленеп ҡалған. Бүректән ситтәрәк, өҫтәрәк, һыңар һайыҫҡан шыҡырҙай. Үлмәҫҡол торорға маташты. Тик бер бөтөн булып туңып ҡатҡан йоҡа фуфайкаһы һәм салбары аяҡтарын бөгөп ергә терәргә ҡамасаулай. Шулай ҙа тырыша торғас ул соҡор стенаһына арҡаһын терәй алды. Аяҡтары менән типкесләп этәрә торғас, арҡаһын соҡор стенаһы буйлап шыуҙырып, аяғына баҫты. Аяҡтары яҙа-йоҙа уралып килгән сылғау эсендә ботинкаларына ҡуша туңып, дөйөм бер туң түмәрҙеме, төбөрҙөме хәтерләтә. Ул ергә баҫһа ла, ерҙе тоймай. Хәленең ни тиклем фажиғәле булыуын аңлап, асырғаланып, йән өшөтөрлөк итеп ҡысҡыра башланы Үлмәҫҡол. Тик уның ауаҙы берәүгә лә барып етмәне. Соҡор тәрән ине. Стеналары дүрт яҡтан да теп-текә. Көрәк менән ҡаҙылған. Һау ҡулын өҫкә соҡор ситенә һуҙып ҡараны. Ә уның йәбешерлек сите Үлмәҫҡолдоң ҡулы осонан тағы ла өҫтә ярты метр ашыуыраҡ бейеклектә ине. Тотонорлоҡ тал да ситтә, бейектә. Соҡор эсендә баҫып ынтылырлыҡ һис бер әйбер, таш, түмәр, бүрәнә булһасы. Ни ғилләнең соҡоролор был? Нимә ҡаҙғандарҙыр?! Әйтерһең дә, ул Үлмәҫҡолдоң тәҡдиренә инселәп ҡаҙылған.

Соҡорҙоң бер яғына аяҡтарын терәп, өҫкә шыуышырға итеп тә ҡараны ул. Ләкин аяҡтар кәүҙәне этәрмәне, улар тыңлауһыҙ, улар туңып ҡатҡайны. Сығырға бер сара ла булмауына әрнеп, соҡор төбөндә һулҡылдап-һулҡылдап иланы Үлмәҫҡол . Йә инде, ана ғына тора бит өйө. Унда балаҡайҙары. Ҡатыны. Бөгөн дә уны көтәләрҙер. Дүрт йыл буйы ул дошманға, ә дошман уны үлтерергә төбәп күпме атты. Танкка ҡаршы ата торған мылтығын күтәреп, окоп буйлап китеп барғанында немец снайперы уның башындағы каскаһын вата атып төшөргәйне. Атакаға барғанда тоғо эсендә ятҡан котелогын да дошман пуляһы үтә тишеп сыҡҡайны. Итек ҡуңысын да пуля ярып үткән ваҡиға булды. Тик бындай билдә һалыуҙар тәҡдирҙең үҙен иҫкәртеүе генә булды, буғай.

Үлмәҫҡол соҡорҙан сығыуҙың һис бер сараһын тапманы. Әммә ышанысын юғалтманы. Бына-бына кемдер килеп сығыр, ҡысҡырған тауышын ишетерҙәр, тип өмөтләнде. Ә теге һайыҫҡан соҡор тирәһенә тағы килде. Тағы ла шыҡырларға тотонды. Саҡыра бит ул, кешеләрҙе саҡыра соҡор янына. Донъяла иң ҡәҙерле, иң яҡын ҡошҡа әйләнде һайыҫҡан. Бөтә ышанысын, өмөтөн шул һайыҫҡандың шыҡырлауында күрҙе. Әллә аяҡтары тотмайынса, әллә көсһөҙлөгөнән соҡорҙоң мөйөшөнә ултырҙы. Берәй тимер булһасы соҡорҙоң стенаһын ҡаҙырға. Ҡаҙыуҙан сыҡҡан балсыҡты аяҡ аҫтына өйөр ҙә өйөр ине. Соҡор ситенә ярты-шар сирекләп булһа ла яҡынлашыр ине. Әммә уның янында һис тимер киҫәге юҡ. Бәкеһен дә вагонда кемдер алды ла бирмәне. Ахырҙа, әйбер һалынған тоҡсайын ҡутара башланы. Бәләкәс Сабурына алған бүләген, ағас автомашинаны тартып сығарҙы ла, өҫтәрәк торған ағас тамырының осона ҡыҫтырып ҡуйҙы. Бөтә тәне ут кеүек яна, үҙе туҡтауһыҙ йүткерә. Йүткерегәнән ҡып-ҡыҙыл ҡан килә. Ҡапыл уның ҡулы еүеш, туң тоҡсайы эсендә ҡаты бер нәмәне һәрмәне. Тотоп алды ла тартып сығарҙы. Был бит ҡырына торған бритва. Бәләкәй, нәҙек, йоҡа ғына немец бритваһы. Әммә үҙенеке. Өмөтө уянды Үлмәҫҡолдоң. Бөтә ышанысы шул бритваға төштө. Хәҙер ул шул бритва осо менән соҡор стенаһын соҡой башлаясаҡ. Тәүҙә ул ҡайһы ерҙән ҡаҙа башларға самалап торҙо. Унан һуң буйы еткән ерҙән туң ерҙе сыя башланы. Ләкин туңған еүеш балсыҡ услап-услап түгел, ярма кеүек кенә ҡойолдо. Аяҡтары хәҙер һис бер нәмә һиҙмәй. Ергә баҫып тороуҙы ла, һалҡынды ла, хәрәкәттән тыуған әҙ генә йылыны ла. Кәүҙәһе лә туң фуфайкаға йәбешеп ҡатты шикелле.

Яҡты көн үтте. Ҡараңғы төштө. Ҡараңғылыҡ менән тағы һалҡын килде. Үлмәҫҡол төнө буйы соҡоно ла соҡоно. Был шөғөлөнөң һөҙөмтәһеҙ булыуын ул таң атып, тағы ла яҡтырғас ҡына белде. Соҡолған еренән аяҡ аҫтына ике бүректәй генә балсыҡ төшкән. Бармаҡ остары ла туңып ҡатты буғай. Тәне ут кеүек яна, йә боҙ һыуыҡлығын тоя... Ҡалтырана, дерелдәй, теше тешкә теймәй. Баҫып торорға хәле ҡалмағандай тоя, ятҡыһы килә. Әммә соҡор төбө тар, еүеш, һалҡын. Ә зиһене әле эшләй. Етелек ҡаҙау оҙонлоғондай бәке-ҡырынғыс менән нисек итеп соҡорҙоң бер яҡ стенаһын ҡаҙып емерәһең инде... Бармаҡтар ҙа туңып, хәҙер инде насар бөгөлә, бәләкәс кенә тимер киҫәген йүнләп тота ла алмай. Ҡан төкөрөп йүткерә, туҡтауһыҙ йүтәлләй. Шул йүтәлләүҙән көсәнеү ҙә тәненә йылы биргәндәй тойола.

Туң стенаны сәтәкәй бармаҡтан да ҡыҫҡараҡ тимер киҫәге менән емереп сығыу мөмкинлеге булмауҙы аңлағас, ул стенала аяҡ йөҙлөгө һыйышлы бер-береһенән икеөс сирек бейеклегендәге ҡыуышлыҡтар соҡорға булды. Был алым өмөтлөрәк кеүек. Аяҡ һыйырлыҡ өс йә дүрт ҡыйышлыҡ ҡаҙһам, мин соҡор төбөнән бер метрҙай күтәрелә алам. Ә унда инде соҡорҙоң ситенә, үлән һабаҡтарына, ә бәлки, тал ботағына йәбешергә Алла ярҙам итер. Шундай йылы, өмөтлө уйҙар күңелен бер аҙ йылытты. Соҡорҙоң ҡайһы еренән ҡыуышлыҡтар соҡорға кәрәклеген билдәләне. Шөғөлө тәненә тағы ла йылы өҫтәне. Тик ҡараңғы ҡуйырғандан-ҡуйырҙы. Күп тә үтмәне, соҡор эсе дөм-ҡараңғы тоҡҡа әйләнде. Асыуы тәненән һытылып сығырҙай хәлгә килеп, тағы ла ҡысҡырырға тотондо Үлмәҫҡол. Бәлки, берәйһе ишетер, үткәүел юл барыбер йыраҡ түгелдер... Шул тирәнән үтә ине бит юл һуғышҡа тиклем... Тик уның тауышы бөгөн сағыу түгел, ә ғырылдау һәм йүтәлләү, ҡан төкөрөү менән аралашҡайны. Ҡысҡырыуы - олоуға, унан йүтәлләү аша һулҡылдап-һулҡылдап илауға күсте. Тәне, гүйә, йә утҡа керҙе, йә боҙло күлгә сумды. Көсәнеп-көсәнеп йүткереүҙән башы сатнап, күҙ алдына ут саҡҡылары сәсрәне. Ҡапыл ул ут саҡҡыһы гөлт итеп ҙур бер ялҡынға әйләнде. Ул ялҡын Үлмәҫҡолдоң битен, ирендәрен, ҡашын, сәс остарын көйҙөрөп, асыҡ иҙеүе аша муйынын, күкрәген, хатта арҡаһын бешерҙе. Эҫелектән сикәһе сатнап, аңын юғалта башланы...

Йәненең зиһенен тырнауынан ҡапыл аңына килеп, Үлмәҫҡол тағы ла күҙҙәрен асты. Соҡор ситенә һаҡал-мыйығы ҡуржаҡланып бөткән, әллә тәңре динле, әллә иҫке динле, төндә уны өйөнә керетмәгән кеше килде. Өҫтән, соҡор ситенән, Үлмәҫҡолдоң күҙҙәренә ҡарап тора ине ул. "А-а-а, здесь стоишь? Не велено господом нам общаться с вами. С иноверцами! Жди суда господня!" - тине лә күҙҙән юғалды. Тик уны Үлмәҫҡол аңламаны. Уның асыҡ көйө туңған күҙҙәре был йөнлө баш аша күк күгелйеменә, төпһөҙ зәңгәрлеккә баҡҡайны. Ә юғарыға күтәрелеп ҡатҡан һыңар ҡулы әле күрмәгән бәләкәс улына алып ҡайтып килгән ағас машинаны ҡыҫып тотҡайны. Гүйә, ул соҡор сите аша аманатын тапшырып, баҡыйлыҡҡа тыныс күңел менән осорға теләп, берҙән-бер һыңар ҡулын күккә һуҙғайны...

**(Аҙағы. Башы 17-се һанда).**

*ӘЙТӘГҮР!*

# "ЮЛДАШ" РАДИОҺЫҘ...

## йәшәй алмайым

**Бөгөн башҡорт радиоһын тыңлайҙармы, ул халыҡ араһында танылыу яулаймы икәнлеген асыҡлау өсөн бер нисә кешенең фекерен белештек.**

**Клара ХӘЙРЕТДИНОВА, Бүздәк районы, пенсионер:** "Юлдаш" радиоһын тыңламайынса бер көн дә тора алмайым. Улым йәшләй генә донъя ҡуйғас, ҡайғымдан ни эшләргә белмәй йөрөгәнемдә ошо радио тапшырыуҙары ярҙамға килде. Радиола күбеһенсә йәштәр эшләй, уларҙы тыңлауы ҡыҙыҡ та, күңелле лә. Хәҙер инде мин яратҡан тапшырыуҙарым, уны алып барыусылар менән бер минутҡа ла айырылмайым, тиһәм дә була. Өйҙә бер радиоалғыс, мал аҙбарында икенсеһе көнөн-төнөн бер туҡтауһыҙ һөйләп тора. Барлыҡ тапшырыуҙар ҙа оҡшай, бигерәк тә иртәнсәк сәғәт һигеҙҙән алып унға тиклем яңғыраған тапшырыуҙарҙы яратып тыңлайым, радиоалғыс эргәһенән китешмәйем. Тура эфирға шылтыратам, ойошторолған уйындарҙа, фекер алышыуҙарҙа ҡатнашам. Яңыраҡ эфирға сыға башлаған "Баҡсасы кәңәше" тапшырыуы ла оҡшап ҡалды. Унда баҡса үҫтереү буйынса төрлө кәңәштәр бирәләр, тыңлаусылар үҙҙәре лә, шылтыратып, белгән мәғлүмәттәре менән бүлешә. Үҫеп етеүенә ҡарамаҫтан, лимон ағасым сәскә атмай, емеш бирмәй ултыра ине, баҡтиһәң, уға сәскә атҡан лимон ботағын ҡушып бәйләргә кәрәк икән. Бынан тыш, Нурия Абдуллинаның "Ҡунаҡ өйө" тапшырыуы бик оҡшай. Бында бөтә проблемаларҙы, ҡайғы-хәсрәтеңде уртаға һалып һөйләшергә, кәңәш алырға мөмкин. Гүзәл Ситдиҡова шаян алып барыусы булараҡ күңелемә ята. Тауыш режиссерҙарының эшенә килгәндә инде, улар теләгән бер йырынды табып ҡуйып ҡына тора. "Юлдаш" радиоһы булмаһа, көнөмдө нисек үткәрер инем дә, ҡайғымды нисек еңер инем, күҙ алдыма ла килтерә алмайым. "Юлдаш" радиоһына ижади уңыштар, киләсәктә лә шулай ҡыуандырып, гел йырлап, гел һөйләп тороуын теләйем!

**Фирүзә ИШБИРҘИНА, табиб:** "Юлдаш" радиоһын ваҡытым булғанда тыңлап барам. Миңә бигерәк тә Зөлфиә Рәхмәтуллинаның халыҡты борсоған һорауҙарҙың, йә үтәлмәгән үтенестәрҙең, мөрәжәғәттәрҙең сәбәптәрен асыҡлап, һаулыҡ һаҡлау, юл-транспорт, мәктәп, бәләкәй ауылдар һ.б. мәсьәләләре буйынса белгестәр, вазифалы кешеләрҙән яуаптар ойоштороған "Алло, һеҙҙе "Юлдаш" тыңлай" тапшырыуы оҡшай. Халыҡ унан үҙенә кәрәкле күп кенә мәғлүмәт туплай. Марсель Байдәүләтов һәм Филүс Ҡасимов иртән иртүк радио тыңлаусыларға яҡшы кәйеф бүләк итә, күңелдәргә дәрт өҫтәй. Тура эфирға шылтыратыусы һәр тыңлаусы үҙ һүҙен уларға ихлас күңелдән рәхмәт әйтеп башлап ебәреүенә аптырарлыҡ түгел. Сөнки беҙҙең алып барыусылар әҙәпле, мәғәнәле һүҙ һөйләй. Автобуста эшкә барғанда урыҫ радиоканалдарын да тыңларға тура килә, алып барыусыларҙың бер-береһен уҙҙырырға тырышып хахылдашып көлөүен, билдән түбән юмор һөйләүен, тыңлаусыларҙы һанға һуҡмай ҡысҡырып, кәрәкле мәғлүмәт бирер урынға сүбәк сәйнәп ултырыуын ишетеп, үҙебеҙҙең "Юлдаш" радиоһының мәҙәни кимәле юғары булыуына ҡыуанам. Әммә башҡорт йырының алтын фондын тәшкил иткән әҫәрҙәрҙе, элекке башҡарыусыларҙы яңғыратмауҙары ғына күңелемде бер аҙ ҡыра. Музыкаль тапшырыуҙар ваҡытында Мәғәфүр Хисмәтуллин, Рәшиҙә Әхмәҙиева, Абдулла Солтанов кеүек мәшһүр йырсыларыбыҙҙың тауышын да ишетке килә.

**Гөлфинә МЫРҘАҠАЕВА, студент:** Мин радионы күберәк ауылға ҡайтҡан осорҙа тыңлайым. Әсәйем "Юлдаш" радиоһын иртән торғас уҡ ҡабыҙа, көнө буйы ул һөйләп тора. Миңә, әлбиттә, йәштәр өсөн тапшырыуҙар оҡшай, "Иртәнге сәфәр", "Аулаҡ" тапшырыуҙарын тыңлайым. Элек "Юлдаш" радиоканалында Рөстәм Ғиззәтуллин, Фәнзил Әхмәтшин, Марсель Байдәүләтов, Марсель Вәхитов тапшырыуҙарҙы күңелле, ҡыҙыҡ итеп алып бара торғайны. Бынан тыш, үҫмерҙәр, йәштәр өсөн төрлө уйындар уйнатыла ине. Йәштәрҙе бер-береһе менән таныштырыу, ҡауыштырыу маҡсатында эшләнгән тапшырыуҙар ҙа бик оҡшай ине. Уйлауымса, "Юлдаш" радиоһы "Ашҡаҙар", "Шәреҡ" кеүек башҡа башҡорт радиоларына ҡарағанда күпкә популяр. Уны бигерәк тә баш ҡаланан ситтә, ауыл ерендә йәшәүсе халыҡ күп тыңлай. Мин йәштәр өсөн алып барылған тапшырыуҙар ваҡытында йәш эстрада йырсыларының мәғәнәлерәк йырҙарын яңғыратыуҙарын теләр инем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт радиоһы булыуы, уның туған телебеҙҙә көн дә һөйләп тороуы - үҙе бер ҡыуаныс булһа, халыҡ араһында уның популяр булыуын белеү бигерәк тә ҙур кинәнес. Башҡорт мәҙәниәтен, телен, тарихын ил, донъя киңлегенә еткереүсе булараҡ, "Юлдаш" радиоһында бөгөнгәсә совет осоро радиоларына хас етдилек, маҡсатлылыҡ, мәҙәниәтлелек һаҡланып ҡалған. Башҡортостанда йәшәүселәрҙең генә түгел, бөтә Ер шары буйлап таралған милләттәштәребеҙҙең рух, күңел талаптарын ҡәнәғәтләндерә ул.**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ЙОМАРТҺЫҢМЫ?
## Гендарың ғәйепле.

■ Бөйөк Британияла үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, был илдә йәшәүсе һәр дүртенсе ҡатын-ҡыҙ интернет ярҙамында үҙенә диагноз ҡуя һәм үҙаллы дауалана икән. Яңылыш диагноз ҡуйыу һөҙөмтәһендә улар файҙаһы теймәгән дарыуҙар һатып ала, йыш ҡына был дарыуҙар кире һөҙөмтәгә килтерә. Ғалимдар әйтеүенсә, зыян күргәндән һуң гүзәл заттарҙы ауырыуҙан ғына түгел, үҙаллы дауаланыуҙың эҙемтәләренән дә дауаларға тура килә. Һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, һәр унынсы ҡатын-ҡыҙ үҙенең сәләмәтлегенә ҡағылышлы проблемаларын ғаилә ағзалары менән бүлешмәй. Ә һәр егерменсе ҡатын-ҡыҙ: "Ауырыу үҙе үтер әле", - тип, медицина ярҙамында йылдан ашыу мөрәжәғәт итмәй йөрөй. Британия ҡатын-ҡыҙҙары үҙаллы дауаларға маташҡан иң йыш осраған билдәләргә йөкө боҙолоуы, баш ауыртыуы, депрессия, мускулдар ауыртыуы, арыу инә.

■ Күптәр "коро күҙ" синдромы менән яфалана. Был сир ваҡытында күҙҙәр әсетә, яҡтыға ҡарап булмай, тиҙ арый. Токио университетының медицина мәктәбе тикшеренеүселәре уны ҡәһүә ярҙамында дауаларға тәҡдим итә. Билдәле булыуынса, кофеин төкөрөк һәм ашҡаҙан һуттары бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, ул шулай уҡ күҙ йәше бизе эшмәкәрлеген әүҙемләштерә. Был мәғлүмәтте Япония ғалимдары 78 оло кешелә тикшереп ҡараған. Уларҙың береһе лә "коро күҙ" синдромы, глаукома һәм башҡа күҙ ауырыуҙары менән ауырымаған. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, кофеин был ауырыуҙарҙы булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Глазго университеты ғалимдары популяр эсемлектәргә анализ үткәргән. Асыҡланыуынса, уларҙың күбеһендә шәкәр күләме норманан юғарыраҡ. 2005 кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, күптәр татлы газлы эсемлектәрҙә шәкәр күплеген белһә лә, һөт һәм башҡа коктейлдәрҙә, энергетик эсемлектәрҙә һәм емеш-еләк һуттарында шәкәрҙең шулай уҡ юғары күләмдә булыуын бөтөнләй белмәй. Мәҫәлән, барыһы ла файҙалы тип иҫәпләгән анар (гранат) һутында шоколадлы һөт коктейленә йәки емеш-еләк һутына ҡарағанда шәкәр 1,5 тапҡырға артығыраҡ. Һуңғы осорҙа һимереү сиренең артыуы тап шәкәрле эсемлектәр ҡулланыу менән бәйле, ти ғалимдар. Был ҡан баҫымының күтәрелеүенә, шәкәр диабетына, йөрәк сирҙәренә, инсультҡа килтерә.

■ Буффало һәм Калифорния университеттары тикшеренеүселәре иҫәпләүенсә, ҡайһы бер кешеләрҙең башҡаларға ҡарағанда йомартыраҡ һәм игелеклерәк булыуына уларҙың гендары "ғәйепле". Ғалимдар ике гормон: "бәхет гормоны" - окситоцин һәм агрессияны яйлаусы вазопрессин кимәлен тикшереп ҡараған. Кемдә был ике гормон юғарыраҡ, улар ҡағиҙә буларак, бик йомарт һәм киң күңелле була. Шулай итеп, агрессияны, һаранлыҡты, тиҙ ҡыҙып барыусанлыҡты кешенең ДНК үҙенсәлегенә һылтарға мөмкин, ти ғалимдар.

■ Ҡала ығы-зығыһы, юлдарҙағы тығындар, йәмәғәт транспортындағы халыҡ, эштәге стресс һәр кемдең нервыларын ҡаҡшатыу һәләтенә эйә. Әгәр ҙә эшкә һәләтлелегегеҙ кәмеһә, йоҡлай алмаһағыҙ, күңелегеҙҙе хәүеф тойғоһо биләп алһа, спорт менән шөғөлләнә башлағыҙ, тип кәңәш итә табиптар. Шулай уҡ башҡа төрлө физик әүҙемлек тә шатлыҡ һәм бәхет гормондары - эндорфиндарҙың кимәле күтәрелеүгә килтерә. Бынан һуң шунда уҡ кәйефегеҙ күтәреләсәк, насар уйҙар шунда уҡ тараласаҡ.

*ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ*

**"Һорағыҙ, яуап бирермен,"- тигән Аллаһ Раббыбыҙ. Ысын күңелдән, изге ниәт менән һораһаң, әлхәмдүлилләһ, Аллаһы Тәғәлә ҡолдарын яуапһыҙ ҡалдырмай. Эш бары тик нисек һәм нимә һорауҙа. Етмеш йылдан ашыу ғәфләт йоҡоһонда булып, аҫыл асылыбыҙҙан биҙеп, Ҡөҙрәт эйәһенә ҡоллоҡ килтереп, ғибәҙәттәр ҡылып һорамаған һәм һоралмаған быуын беҙ. Был турала минең бер шиғырым да бар.**

# БӘНДӘМ АТЛАП КИЛҺӘ...



## мин уға йүгереп барырмын

### *Һоралмаған быуын*

*Диндән яҙҙырылғандарҙан*
*Тыуған динһеҙ быуын беҙ.*
*Асылдан да, аҫылдан да*
*Шуға йәлап һыуындыҡ.*
*Ҡул күтәреп, доға ҡылып,*
*Беҙгә кем ни һораған?*
*Аллаһ беҙгә мохтаж түгел -*
*Алға пәрҙә ҡоролған.*
*Һоралмаған, ниәт итеп*
*Ғәмәл ҡылмаған бер кем.*
*Бәйғәмбәр өммәтендәге*
*Беҙме бәхетһеҙ төркөм?*
*Шөкөр әле, иман ҡалҡып,*
*Әлепкә төшөнәбеҙ.*
*Ебебеҙ сеймәлеп бөтә,*
*Һыныып ҡуя энәбеҙ.*
*Ярай әле, ул-ҡыҙҙарға*
*Һорарға форсат тейҙе.*
*Эй, Хоҙайым, үлсәүҙәреңә*
*Изгелек ягын эйҙер!*

Әйткәндәй, Әбделмәмбәт мәктәбе уҡытыусыһы, үҙешмәкәр композитор Миннур Ҡасимова ул шиғырға көй ҙә һалғайны. Хәйер, эш шиғырҙа түгел, һүҙ башым Раббыбыҙҙан һорау ине.

Беҙ Үҙен онотоп китһәк тә, Аллаһы Тәғәлә бәндәһен бер ваҡытта ла ташламай. Үҙенең барлығын гел иҫкәртеп тора Ул. Беҙ генә, әҙәмлегебеҙҙә барып, Уны ишетеү, Ул ебәргән, алдыбыҙға сығарған билдәләрҙе күреү һәләтенән ҡолаҡ ҡаҡҡанбыҙ. Шәхси тәжрибәмдән сығып әйтә алам: ғибәҙәтең күпме һәм ысын йөрәктән булһа, Аллаһтың биргәне лә шунса, хатта унан да күп. "Бәндәм минә атлап килһә, мин уға йүгереп барырмын", тигәне лә ошонандыр, тим.

Динһеҙлек осоронда үҫһәк тә, шөкөр, күңелемдән төпкөл бер мөйөшөндә Аллаһҡа һөйөү һәм унан самими бар ҡурҡыу йәшәне барыбер. Һәр нәмәне Аллаһтан һорау ҡанға һеңгәйне. Һора, тигәндән. Баймаҡ районында йәшәүсе бер туған һеңлем бер хәл-ваҡиғаны һөйләп, иҫте китәргәйне. "Ихатамдағы асыҡ һауалағы мейескә сусҡаға өйрә бешерергә тип элекке һауын аппаратының бидонын һыу менән ултырттым. Һыу шыйлап ҡайнап та сыҡты. Киртмәс-киртмәс ҡапҡасына ҡылысын нығытып кейҙереп тә ҡуйғанмын. Ул ни уйлап ҡайнар килеш ҡапҡасын асырға уйлап бидон ҡылысына йәбешкәнмендер инде - ҡул менән тегеләй-былай хәрәкәт яһағансы, бидон ҡукҡа атылып та китте, мине ҡайнар һыуы менән ҡойондорҙо. Быу менән һыуға яныуҙы башынан ошо ғазапты кисергән кеше генә белә. Ихатала ирем менән ҡәйнештәр ҙә бар ине. Бешеүҙән, ауыртыныуҙан мин ҡысҡыра ла алмай ҡалғанмын. Күҙ күрмәҫ булғас, һәрмәнеп өйгә инер китәм икән - эргәләге өй ҡабырғаһын һәрмәп йөрөйөм,ти. Ҡәйнеш тейеш кеше мине күреп ҡалып: "Әллә еңгәй янды ла ҡуйҙы инде", - ти икән.

Мине тиҙләтеп дауаханаға алып барҙылар. Билдәле, һалып та ҡуйҙылар. Төнгә өстәрҙә тышҡа сыҡҡым килде. Һыҙлауҙарға түҙеп торғоһоҙ. Һәрмәнеп йөрөп кейенеп, коридорға сығам. Ярым асыҡ ишекле ирҙәр булмәһенән йәлләгес тауыш ҡолаҡҡа салына: "Йәш килеш әрәм булған, быны хәҙер ире ташлап китер инде, зәғиф булып ҡалған балаҡай..." Тәүҙә һүҙ минең турала барғанын төшөнмәйем, аңға барып еткәс, тертләп китәм дә палатаға кире боролам. Мин ҡыпшырҙаған тауышҡа уянған ҡатындарҙан күҙгә һорайым. Береһе лә бирмәй, юҡ, тиҙәр. Ахырҙа, кире коридорға сығам, дежур сестраны эҙләп китәм. Ул да күҙгә биреп тороуҙан баш тарта. Шунда йыуыныу бүлмәһен иҫкә төшөрәм, бәй, күҙгә унда ла булмай сыға. Шул саҡ күҙемә тулы һыулы биҙрә салына, бәй "тере" күҙгә барҙа, ниңә кешеләргә инәлеп йөрөргә? Аһ-аһ, күҙгөнөн минә кеше түгел, бер бисурамы-енме бағасы... Үҙемдең үҙем икәнлегенә ышанып өсөн үҙемде семтеп, ҡапшап ҡарайым. Юҡ, тәнем һиҙә, һыуҙа сағылған иң китмәле ҡурҡыныс йөҙҙән башҡаһы үҙемдеке. Шул секундта йәшәүҙән төңөләм, теге палаталағы ирҙәрҙең минең хаҡта гәп һатыуы аҡылыма барып етә. Тукта, ни бысағыма мин бында әҙәм көлкөһө булып, кеше өркөтөп ятам һуң әле? Ҡайтырға - һәм вәссәләм! Палатаға инеп, ашыҡ-бошоҡ әйберҙәремде йыям да, медсестра күрмәҫ борон ҡайтыу яғына һыпыртам. Ул саҡта беҙҙең ауылда амбулатория бар ине әле. Таңғы бишалтылар тирәһе. Иртәсел кешеләр һыйыр ҡыуған мәл. Кеше күҙенә күренмәҫ өсөн кәртә арттары буйлап ҡаса-боҫа барам. Өйөмә ҡайтып ингәс тә күҙгөгә йәбешәм. Ундағы теге бисураны күреп, һушымды юя яҙам. Ҡаҙ йоморҡаһындай һыулы шариктар, шеш артынан шеш кенә... Ирем мине күреп, артҡа сигенә биреп ҡуя. Миндә тик бер генә ҡайғы - кеше сүрәтенә ҡайтыу. Берауыҡҡа бөтә фани донъянан: балаларҙан, ирҙән, эштән, донъя мәшәҡәтенән баш тартам. Һәйәп ултыртмалы йомро күҙгөгә ҡарап онотолам. Телем бер туктауһыҙ Аллаһҡа ялбара: "Йә, Аллам, минең битемде кешегә ҡарарлыҡ, кешене минән өркмәслек итһәңсе. Элекке хәлемә ҡайтарһаңсы..." Ҡулға балалар кремы килеп эләгә. Хоҙайҙан илай-ялбара элекке йөҙөмдө кире ҡайтарыуын һорайым, үҙем бармаҡ остарыма теге кремды маныып, иплəп-иплəп битемде һылайым. Быны минә берәү ҙә шулай эшләргә ҡушмай, үҙлегемдән шулай ҡыланам... Ашамайым, эсмәйем, телемдә - ялбарыу, күңелемдә шәбәйеүгә ниәт, ә башҡа нәмә мине бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмай... Ошо сүрәттә ҡатып күпме ултырғанмындыр - төн уртаһына ҡарай йоҡлап киткәнмен. Бер заман уянып киттем. Ни ғәжәп: өйҙөң мөйөшөнән ағылып ҡына ап-аҡ нур инә, бына ул нур минең ҡул суҡтарыма килеп тоташа... Тоташа ла үҙ ҡулдарым йүгереп йөрөп битемдән һыйпай башлай. Ҡурҡыштан һәм ғәжәпләнеүҙән ҡулдарымды ҡаушарам. Һәм иң ғәжәбе -минең кәүҙәм горизонталь рәүештә түшәктән күтәрелә, ҡулдар бушай һәм йәнә йүгергеләп битте һыйпай... Ә ул ҡулдарҙың йомшаҡлығы, минең ҡул булһа ла, минеке түгел - сифатлы ҡылҡәләм кеүек йомшаҡ... Өнөммө был, төшөммө тип аптырайым, ҡурҡыштан ырғып торам да, иҙәндә ултырған флягәнән һыу алып, йәнәһе, үҙемде уятам - өҫтөмә һыу бөркә башлайым. Һыу тамсылары сәсрәгәс, ирем уяна: "Нимә алйотланаң?"- тип һорай. Иҙәндә күшеккән тауыҡ ише мин торам. Ни булды был, өнмө был, төшмө? Күҙемә йоҡо әҫәре инмәне. Төшкә ҡарай йоҡлап киткәнмен. Йоҡлап торғас, йәнә күҙгөгә күҙ һалам: ни ғәжәп, унда элекке мин торам.

Мин ҡасып ҡайтҡанды белгәс, хирург өйгә килде. Иртәгәһенә баҙарға сығырға эшкиндем. Ана шулай мөғжизәле рәүештә Аллаһ мине үҙ нурына тоташҡан үҙ ҡулдарым ярҙамында дауаланы. Теләгәнем ҡабул булды - ныҡ-ныҡ теләһәң, изге теләктәр ҡабул була икән ул - ошоға инандым..."

Эйе, һеңлемдең битендә, муйынында яныу эҙҙәре - ибөтәйһеҙ йөйҙәр ҡалманы. Уға ҡарап берәү ҙә, янған, тип әйтә алмай. Ә аяғында, нурлы ҡул йөрөмәгән ерҙә яраһы бөрөшөп, ошо бәләне хәтерләтеп тора. Мосолмандың ғәмәле ниәтенә ҡарап баһалана. Һеңлем бит Аллаһтан йөҙөн элекке хәлгә ҡайтарыуҙы һораған. Әйтәһе һүҙемдең көттәһе шул: изге ниәт менән һораһаң, Аллаһ бәндәһенә яуап бирә. Күрсәккә килеп теркәлгәндәр ошоно онотмаһын ине. Бөтәбеҙҙең дә яҙмышы - Аллаһ ҡулында...

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**

БАҠСА

# ТАҒЫ ЛА...



## баҡса еләге тураһында

**Баҡса еләге артыҡ ҡатмарлы тәрбиә талап итмәгән культураларҙың береһе. Әммә тәүге йылдарҙа ул мул уңыш бирһә лә, дүрт-биш йылдан һуң уңыштың ҡапыл ғына кәмеүе йәки еләк ҡыуаҡтарының ҡороуы ихтимал. Шуға ла еләктең үҫкән урынын йыш алыштырып торорға кәрәк. Мин үҙем еләкте бер урында ике йыл үҫтерәм, сөнки, күҙәтеүҙәр буйынса, өсөнсө йылына ул насар емеш бирә, сирҙәргә, зарарлы ҡорттарға бирешеп бара, өлөшләтә ҡорой башлай. Шуға ла түбәндәге тәжрибәм менән уртаҡлашам.**

Еләкте күсереп ултыртыу өсөн иң ҡулайлы ваҡыт булып июль иҫәпләнә. Әгәр ҙә һуңғараҡ ҡалһағыҙ, икенсе йылына еләк әллә ни уңмаясаҡ. Шуға ла уны күсереп ултырта торған йылда еләккә тәғәйенләнгән түтәлгә редис, йәшел борсаҡ, һарымһаҡ, иртә өлгөрә торған кәбестә, ләлә сәскәләре кеүек июнь айында ҡаҙып алына торған үҫентеләр сәсәм.

**Еләк ултыртыу.** Шулай итеп, июлдең тәүге декадаһына иртә өлгөрә торған йәшелсәләр йыйып алынырға тейеш. Бынан һуң түтәлде тәрән итеп ҡаҙып сығырға кәрәк. Янған тирес, компост һәм минераль ашламаны һалып ҡалдырырға. 5-7 көндән һуң ер тығыҙланғас, баҡса еләген ултырта башларға мөмкин. Мин рәттәр араһында 60 см, ә ҡыуаҡлыҡтар араһында 30 см ара ҡалдырам. Түтәлгә еләк ҡыуаҡтарын бер юлы йәки бер нисә өлөшкә бүлеп ултыртырға була. Тик уларҙың барыһын да тиҙерәк сәсеп бөтөү яҡшыраҡ. Еләктәрҙең тамыры даими урынға иртәрәк ултыртылған һайын, улар ҡеүәтлерәк була, тимәк, яҡшыраҡ ҡышлай һәм киләһе йылда уңышты күберәк аласаҡһығыҙ. Был йылда яңы ултыртылған еләктәргә бары тик көндәр ҡоро торған саҡта һыу ғына ҡойоп торорға кәрәк буласаҡ. Әйткәндәй, һыу ҡойғандан йәки ямғырҙан һуң уларҙың араһын йомшартығыҙ һәм барлыҡҡа килгән мыйыҡтарынан таҙартып тороғоҙ. Ҡыш уларҙың өшөп ҡуйыуынан ҡурҡһағыҙ, еләктәрҙең өҫтөнә ботаҡтар һалып ҡалдырығыҙ.

**Яҙ еткәс.** Ер йылынғас та, еләк түтәлдәрен ботаҡтарҙан, иҫке япраҡтарҙан таҙартырға. Рәттәр араһын йомшартырға. Әгәр ҙә яҙ ҡоро икән, мөмкинлегегеҙгә ҡарап, еләк сәскә атҡан ваҡытта һыу һибегеҙ, тупраҡты йыш ҡына йомшартып тороғоҙ. Еләккә төймәләнгәндән алып уңыш йыйып алғанға тиклем башҡа бер нәмә лә эшләргә кәрәкмәй.

**Уңыш йыйып алынғас.** Ер еләге япрағы 60-70 көн йәшәй, һуңынан һулый. Тимәк, уңыш йыйып алынғандан һуң еләк ҡыуаҡлығындағы япраҡтар һыуыҡтар төшөүгә үләсәк. Йәғни, улар ҡыуаҡты һыуыҡтан да һаҡлай алмай, етмәһә, йәш япраҡтарҙың үҫеүенә ҡамасаулай. Бынан тыш, ҡартайған япраҡтарҙа ҡорттар һәм бәшмәкле сирҙәрҙең споралары күп була. Бына шуның өсөн дә уңыш йыйылғандан һуң япраҡтарҙы ҡырҡып алырға һәм ергә күмергә кәрәк. Был эш түбәндәгесә башҡарыла: һул ҡул менән ҡыуаҡлыҡтары тотошлай тотабыҙ. Еләктең мыйыҡтары ла бергә алына. Һәр ҡыуаҡлыҡтан ике иң көслө мыйыҡты айырып алып, ергә һалабыҙ. Һул ҡулдағы башҡа япраҡтарҙы һәм мыйыҡтарҙы ҡырҡып ташлайбыҙ. Ҡыуаҡлыҡтар араһындағы ерҙе йомшартып, мыйыҡтарҙың тамырын еңелсә тупраҡҡа батырабыҙ. Был эште башҡарыу алдынан түтәлгә һыу һибелгән йәки ямғыр яуып үткән булһа, тағы ла яҡшыраҡ. Кәрәкмәгән япраҡ һәм мыйыҡтарҙан арынғас, еләк ҡыуаҡтарын бәшмәкле сирҙәрҙән һәм ҡорттарҙан һаҡлау өсөн эшкәртергә була. 10 литр һыуға 2-шәр ҡалаҡ кельтан һәм баҡыр хлорокисы һалып, бәләкәй генә ҡул насосы менән һәр ҡыуаҡлыҡҡа һибеп сығырға. Кельтан булмаһа, уны колорада ҡуңыҙына ҡаршы ҡулланылған саралар менән алыштырырға була. Күпме күләмдә алырға икәнлеге уның рецебында яҙылырға тейеш. Был эштәрҙең барыһы ла уныш йыйып алынғас, сама менән 10-15 июль башҡарыла. Ошо уҡ ваҡыттан иртә өлгөрөүсе йәшелсәләр үҫкән түтәлде әҙерләй башларға. Япраҡтарҙан таҙартылғандан һуң ҡалған мыйыҡтар 10-12 көндән нығына, тимәк, уларҙы яңы түтәлгә күсереп ултыртырға кәрәк. Әгәр ҙә уларҙы ере менән бергә күсереп ултыртһаң һәм һыу һипһәң, үҫентеләрҙең барыһы ла үҫеп китәсәк. Яңы түтәл тулғас, тәүге түтәлебеҙҙәге барлыҡ мыйыҡтарҙы алып ташлайбыҙ, яңылары барлыҡҡа килгән һайын уларҙы өҙөп торабыҙ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



### Мөғжизәле аппараттар

Һуңғы йылдарҙа мөғжизәле аппараттар һәм мөғжизәле препараттар киң таралды, уларҙы селтәрле маркетинг аша ғына тараталар. Уларҙың ни тиклем мөғжизәле икәнен тикшереп ҡарайыҡ. Ысынлап та, бындай аппараттар барыһы ла тиерлек кешенең энергетикаһына йоғонто яһай һәм уның хәле яҡшырыуы ла мөмкин. Әммә барыһы ла шулай яҡшымы?

Мәҫәлән, мөғжизәле табансалар бар. Кеше уларҙы кейә һәм табандың ауыртыуы бөтә. Нимә була һуң? Барыһы ла ябай: "мөғжизәле табансалар" тәндең аҫҡы өлөшөндәге барлыҡ кире энергияны өҫкә ебәрә (был турала улар үҙҙәре лә яҙа) һәм табандарҙағы ауыртыу туҡтай. Әммә ауралағы энергетик бысраҡ бер ҡайҙа ла китмәй. Кешенең организмы шул тиклем аҡыллы һәм ул йәшәү өсөн мөһим ағзаларҙы бысратмаҫ өсөн барлыҡ бысраҡ энергетиканы ситкә - табандарға ҡыуып ебәрә. Ә бында барлыҡ бысраҡ энергетиканы кире өҫкә ҡыуып сығаралар һәм кешенең телән һиндәй ағзаһында: бөйөрҙәрҙә, йөрәктә, бауырҙа һ.б. проблемалар тыуыуы ихтимал. Үҙегеҙ һайлағыҙ: бөйөр, бауыр, йөрәк йәки башҡа ағзалар ҡаҙерлерәкме, әллә табандарығыҙмы?

Ә тәнгә ҡуйып йөрөй торған төрлө мөғжизәле пластинкалар, аппараттар, гормонизаторҙар ниндәй йоғонто яһай һуң? Кеше тәненә шундай препаратты ҡуя һәм уның хәл-торошо яҡшыра: арығанлығы бөтә, башы ауыртыуҙан туҡтай һ.б. Был осраҡта аппарат тәндең энергетик бысрағын периферияһан аураға ҡыуып сығара, әммә ул бер ҡайҙа ла юғалмай. Әгәр кеше был аппаратты даими үҙенең эргәһендә йөртә икән, энергетик бысраҡ аураның ситтәренә йыйыла, бер ни тиклем ваҡыттан һуң ул кинәйә һәм ҡабат тәндә баҫа башлай. Кешелә ҡабат арығанлыҡ, баш ауыртыуҙары башлана.

Был юлдарҙы уҡығас, бәлки, аппараттар ауранның да бысрағын таҙарта, тиерҙәр. Ышанмағыҙ! Насар уйҙар һәм эмоциялар бысрағын бер генә аппарат та таҙартмай - үҙегеҙгә үҙгәрергә кәрәк!

Хатта һеҙҙең күҙ алдында тәжрибә үткәреп күрһәтерҙәр: аурағыҙҙы фотоға төшөрөп, уны экранда күрһәтерҙәр, ҡулығыҙға мөғжизәле аппаратты тотоп ҡарарға ҡушырҙар һәм аурағыҙҙы ҡабат фотоға төшөрөрҙәр - аурағыҙҙың яҡшырғанын күрерһегеҙ. Ә һеҙ тәжрибәне улар алдында үҙегеҙсә эшләп күрһәтегеҙ: ябай магнит алып, ҡулдарығыҙҙа тотоп тороғоҙ һәм аурағыҙҙы фотоға төшөртөп ҡарағыҙ - ул тағы ла яҡшыраҡ буласаҡ. Бары тик ҡулығыҙҙа магнит (аппарат) тотоп торғанда организмығыҙҙың электромагнит ҡыры үҙгәрә, әммә ауралағы бысраҡ үҙгәрмәй.

Ҡайһы берҙә аппарат ер тирбәлешенә көйләнгән, тиҙәр, шуға ла ул, йәнһе, барлыҡ ағзаларҙы ла терғеҙә. Ышанмағыҙ, ерҙең тирбәлеше 10 гц тирәһе - был вирустар, стафилококктар һ.б. йәшәү спектры. Беҙгә йоғошло ауырыуҙар менән интекмәҫ өсөн юғары тирбәлеш кәрәк. Әгәр һеҙ шундай аппарат менән йөрөһәгеҙ, киреһенсә, үҙегеҙҙең тирбәлешегеҙҙе кәметәсәкһегеҙ.

Ҡайһы берҙә, аппарат махсус тирбәлешкә көйләнгән һәм бөтөн ағзаларҙы ла дауалай, тиҙәр. Ышанмағыҙ, һәр ағзаның үҙ тирбәлеше, улар төрлөсә.

Беҙ нанотехнологиялар өлгөһөндә, ғилми-тикшеренеү институттарында эшләнек, дауалау ДНК кимәлендә бара, тиҙәр. Улар акуланың йәки ҡомаҡтың ДНК-һын өлгө итеп алған. Ә улар кешегә хас ауырыуҙар менән сирләмәй. Һәм һеҙ ошо дарыуҙарҙы ашап, сәләмәт булырһығыҙмы? Ә киләсәк быуындарығыҙҙа, ДНК-ға тәьҫир итеү арҡаһында, кешегә хас булмаған ҡылыҡтар килеп сыҡмаҫмы? Әллә һеҙ башҡаса нәҫел дауам итергә уйламайһығыҙмы? Ә мәғлүмәти энергия менән алмашыу?

Организмға зыянлы электр магниты нурланыуын кәмет торған приборҙар бар. Әммә һеҙ уны үҙегеҙ ҙә эшләй алаһығыҙ һәм ул һеҙгә 10 тингә барып баҫыр. Көсһөҙ магниттарҙың тәьҫире ҡулланылған предметтар була. Ысынлап та, кеҫәгеҙҙә һыуыҡҡа йәбештерелә торған теләһә ниндәй магнит йөрөтөгөҙ.

Ә дауаланыуҙың иң мөһиме мөхәббәт аша башҡарыла. Мөхәббәт барлыҡ кире энергияны ыңғайға әйләндерә. Мөхәббәт барлыҡ ағзаларҙы ла, күҙәнәктәрҙе лә илаһи камиллыҡҡа килтерә, гармониялаштыра.

**Рауфан МОРТАЗИН.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Аң тәбиғәте: быңаса булмаған суперярҙам

**Тормоштоң ыңғай яҡтарына ғына иғтибар туплаһағыҙ һәм камиллыҡҡа ынтылһағыҙ, тиҙҙән яҡшы яҡҡа үҙгәреүегеҙҙе һәм ыңғай сифаттарығыҙ барлыҡҡа килеүен тойорһоғоҙ.**

Тап ошондай ынтылыштар - ысын ғилем сығанағы һәм улар һеҙҙе яңы бейеклектәргә күтәрәсәк. Шуға күрә боронғо аҡылды онотоорға ярамай: тейешле белемегеҙ булғанда, был тормошта теләгән маҡсатығыҙға өлгәшә алырһығыҙ. Белем теләһә ниндәй маҡсатҡа өлгәшеү һәм әҙерлек ҡоралы, ул, аңлап һәм дөрөҫ ҡулланғанда, тормоштоң төрлө хәлторошонда, төрлө ваҡытта тыуған һорауҙарға яуап бирә.

Әгәр һеҙ өс йылда мультимиллионер булырға теләйһегеҙ, ти, әммә үҙегеҙ нимәлер эшләй башламай тороп, Аллаһы Тәғәләгә күпме генә ялбарһағыҙ ҙа, бер ниндәй ҙә һөҙөмтә булмаясаҡ. Әммә үҙ алдығыҙға маҡсат ҡуйып (мәҫәлән, йылына миллион һум аҡса тупларға), план эшләп (мәҫәлән, яңы дефицит продукт уйлап табырға) һәм ошо продукт буйынса барлыҡ мәғлүмәтте, баҙарҙы, эшҡыуарлыҡта уңышҡа өлгәшкән башҡа кешеләр ҡулланған ошондай уҡ белемде эҙләй башлаһағыҙ, еңеүгә ынтылыш һәм башҡа стимулдар маҡсатығыҙға өлгәшергә ярҙам итер.

